*Уйлап та тормайынса, миңә яуызлыҡ күрһәткән кешегә мин баш эйәм һәм уны иң йомарт һөйөү менән бүләкләйем; ул ни тиклем күберәк яуызлыҡ ҡылһа, мин шул тиклем күберәк изгелек ҡыласаҡмын.*

*(Будда).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 МАРТ (БУРАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№12 (534)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Халҡымдың бөйөклөгөн...**

ошо һалдат ҡылғаны менән үлсәр инем



5

**Туған теленде белмәү -**



8-9 милләтең алдындағы хыянат ул

**Зәйнулла**



10-11,16

**Мораҙымда бар...**

Сынтимер самолеты



13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## һәр кем күңелендә онотолмаҫ ваҡиғалар йәшәй. Ә һеҙҙең хәтер ниндәй тарих һаҡлай?

***Ризван ХАЖИЕВ, Башҡортостан Республикаһының XII саҡырылыш Юғары Советы халыҡ депутаты, журналист:*** Йылдар үткән, кеше олоғайған һайын, хәтер ебе лә тарҡала, арҡан осо һымаҡ һүтелә, сүбәкләнә, тормоштоң төрлө осоронда һин ҡатнашҡан ваҡиғалар тоноҡлана башлай. Ләкин күпме ваҡыт үтһә лә, һаман онотолмай, күңел күгендә сағыу йәйғор төҫлө балҡып торғандары ла байтаҡ. 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты яуланыуын тап шундай ваҡиғаларҙың береһе тип атар инем. 1990 йылдың 10 октябрендә Өфөнөң Совет һәм Фрунзе (хәҙер - З.Вәлиди) урамдары киҫешкән юл сатын төйәк иткән Ижтимағи-сәйәси үҙәктең Ҙур залында БССР Юғары Советының III сессияһы асылды. Уның көн тәртибенә туғыҙ мәсьәлә ҡуйылһа ла, һөйләшеү, ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр уның тәүгеһе - "Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация" проекты тирәһендә өйөрөлдө. Юғары Совет рәйесе Мортаза Рәхимов, сессияны асып, көн тәртибе раҫланғас, тәүге һүҙҙе Декларация проектын әҙерләү комиссияһы рәйесе Юрий Деминға бирә. Ул проект тексын уҡып бөтөү менән, әле бер, әле икенсе депутат трибунаға атлыҡты, залдағы ике микрофонға ла оҙон сират теҙелде. Бәхәстәр ҡыҙғандан-ҡыҙа, зал бал ҡорттары айырылғанды хәтерләтеп, гөжләй, айырым күстәргә ойошоп, шаулай - сыҙа ғына! Шул саҡ көтмәгәндә ут күршебеҙ - Татарстан Яҙыусылар союзы рәйесе Ринат Мөхәмәҙиевҡа һүҙ бирелә. "Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле башҡорт дуҫтар! - тип бөтәһен дә ғәжәпләндереп, саф башҡортса башланы ул телмәрен.- Бөгөнгө сессияла башҡортса яңғыраған тәүге һүҙ был, ә һеҙ үҙ телегеҙҙә сығыш яһарға оялып ултыраһығыҙ.- Уның был һүҙҙәре үҙҙәрен башҡорт тип йөрөткән депутаттар сәменә уҡ һымаҡ барып ҡаҙалды. Улар бер-береһенә ҡарашып, өнһөҙ ҡалды, оялыштарынан ҡыҙарынып, баштарын түбән эйҙе. "Бында ҡайһы берәүҙәр,- тип дауам итте һүҙен Ринат Мөхәмәҙиев,- Декларацияны бөтә халыҡ референдумына сығарып тикшертмәксе. Минеңсә, был - әхлаҡһыҙлыҡ, сөнки ул башҡорт халҡы файҙаһына булмаясаҡ. Ә бит Ер шарында башҡорт халҡы үҙенең дәүләтселек хоҡуҡтарын тормошҡа ашырырлыҡ башҡаса бер генә милли-территориаль биләмә лә юҡ, Башҡортостан - уның берҙән-бер аҫаба биләмәһе".

Көслө алҡыштар Ҙур залдың бейек көмбәҙен тетрәтеп ебәрҙе... Икенсе көн, йәғни 11 октябрҙә, сессия барған бинаны пикетсыларҙың тығыҙ ҡулсаһы уратып алғайны. Милли кейемдәге башҡорт атлылары ла күренеп ҡалды. Ишек төбөндәге милиционерҙарға мандаттарыбыҙҙы күрһәтеп, көс-хәл менән эскә үтәбеҙ. Арттан "Суверенитет!" тип хор менән ҡысҡырған тауыштар яңғырай. Кисә индерелгән өҫтәмәләр, төҙәтмәләр менән яңыртылған Декларация уҡыла, һәр пункт асыҡ тауыш биреү юлы менән нығытылып бара, әммә урамдағы халыҡҡа был ғына етмәй: исемләп тауыш бирергә кәрәк. Тиҙ генә бюллетендәр әҙерләнә, һәм депутаттар йәнә тауыш бирә. Һөҙөмтәлә, тик бер генә депутат - Иван Андреевтың ғына ҡаршы тауыш биреүе асыҡлана. Ниһайәт, иҫәп комиссияһы Башҡортостандың Дәүләт суверенитеты тураһында Декларацияның ҡабул ителеүен белдерә. Депутаттарҙың көслө "Ура!" ҡысҡырыуынан сессия залы урынынан ҡуҙғалғандай була. Беҙ бер-беребеҙҙе ҡосаҡлайбыҙ, үбәбеҙ, ә күҙҙәрҙән субырҙап йәштәр аға, тик быны бер кем дә йәшермәй, һөртмәй, сөнки еңеү, берҙәмлек шатлығынан атылып сыҡҡан изге, саф йәштәр ине улар...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАЯНДАР ҺӘМ ОТҠОРҘАР...

## юмор менән йөкмәткене йәнәш атлатты



"Башҡорттар.ру" командаһы.

Дауамы 5-се биттә.

ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ

# ТӨП ДОШМАНДАР...

## коррупция һәм инфляция

**Илдең хәл-торошон унда йәшәгән халыҡтың йәшәү кимәленән сығып баһалайҙар. Быны асыҡлау маҡсатында төрлө тикшеренеүҙәр, һорау алыуҙар һәм башҡа төрлө алымдар ҡулланыла. Уларҙың һөҙөмтәһенә ышаныу-ышанмау һәр кемдең үҙ иркендә, әлбиттә, шулай ҙа килтерелгән һандарға күҙ һалып үтеү яҙыҡ түгелдер. Түбәндә ошондай тикшереүҙәрҙең береһен килтереп үтмәксебеҙ.**

Рәсәй граждандарының урта класына инеүселәр төп дошмандары тип коррупцияны һәм инфляцияны һанай. Урта класҡа беҙҙең илдә, Бөтә Рәсәй тормош кимәлен баһалау үҙәге билдәләүенсә, килемдәре илдә дөйөм билдәләнгән иң түбән йәшәү кимәленән 2,5 тапҡырға күберәк булған халыҡ инә, йәғни бер кешегә 7000 һум тирәһе тура килә.

Ағымдағы йылдың ғинуар айында уҙғарылған тикшереүҙә халҡы 100 меңдән артыҡ булған 164 ҡаланан 18 йәштән алып 65 йәшкә тиклем 2300 кеше ҡатнашҡан. Шулай итеп, һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 92 проценты илдәге коррупцияның көслө булыуы хәүефкә һала. Улар фекеренсә, нәҡ коррупция ил иҡтисадын тотҡарлаусы фактор булып тора. Ә респонденттарҙың 69 проценты иһә юғары инфляция борсой. Билдәле булыуынса, 2012 йылда Рәсәйҙә инфляция кимәле 6,6 процент тәшкил итте. Был һанды ил Хөкүмәте кәметергә вәғәҙә бирә, әлбиттә, ләкин уның аныҡ ҡына ваҡытын әйтмәй. Шуға күрә түҙемлекте усҡа йомоп көтөргә генә ҡала. Шулай уҡ тикшереү халыҡтың 47 проценты эш урынын юғалтыуҙан ҡурҡыуын асыҡлаған.

Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың күбеһе магазиндан һатып алынған әйберҙең һәм азыҡ-түлектең артыҡ ҡыйбат булмауын ҡаты контролдә тота. Мәсәлән, респонденттарҙың 41 проценты ҙур әйберҙәр һатып алыу ваҡытын "хәлдәр яҡшырғанға" тиклем ҡалдырыуҙы хуп күрә. Шулай ҙа, автомобиль йөрөтөүселәрҙең 42 проценты киләһе ике йылда яңы машина алырға ниәтләүен билдәләй. "Тимер ат"ты улар кредит ярҙамында "йүгәнләргә" уйлай. Дөйөм алғанда, былтыр респонденттарҙың 32 проценты матди хәленең хөртәйеүен, ә 25 проценты иһә яҡшырыуын билдәләй.

Рәсәй иҡтисадынан "ялҡып", сит илгә китергә теләүселәрҙең дә һаны байтаҡ, йәғни 38 процент тирәһе тәшкил итә. Тикшереүселәр был һанды юғары, тип билдәләй. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй ҡалаларҙан Мәскәүгә күсергә теләүселәр ҙә аҙ түгел (23 процент).

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күренеүенсә, коррупция һәм юғары инфляция ил етәкселеген генә түгел, ә ябай халыҡты ла борсой. Шуға күрә, был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ике яҡтың да берҙәм булыуы һәм бер-береһен аңлап эш итеүе генә уңышҡа килтерергә мөмкиндер.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һәр кем күңелендә онотолмаҫ ваҡиғалар йәшәй. Ә һеҙҙең хәтер ниндәй тарих һаҡлай?

(Башы 1-се биттә).

***Мәһинур УТӘБАЕВА, РФ мәғариф отличнигы, Сәйәси репрессия ҡорбандарының Рәсәй ассоциацияһы ағзаһы:*** Илебеҙҙең киң мәғлүмәт сараларында 5 мартта Сталиндың үлгән көнө айҡанлы һүҙ ҡуйыртылды. Бынан алдараҡ та Волгоград ҡалаһына уның исемен ҡайтарыу тураһында шаушыу булып алғайны. Сталинға мөнәсәбәт төрлөсә: уны күрә алмаусылар ҙа, яҡлаусылар ҙа, яуыҙлығын аҡлаусылар ҙа күп, ләкин был шәхескә битарафтар ғына юҡтыр, моғайын. Сталиндың үҙ халҡына ҡарата ҡылынған ауыр енәйәте - ҡаты золом эҙемтәләренә битарафтар бар икән, тимәк, улар кеше түгел, минеңсә. Ғөмүмән, шәхес культы йылдарында илдә репрессия еле ҡағылмаған ғаиләләр бик аҙ булғандыр. Мин иһә быны сабый ғына сағымдан үҙ башымдан кисерҙем: ғаиләбеҙ 1931 йылда уҡ Себергә һөрөлә, шунда уҡ 1937 йылда атайым, ваҡытында Әхмәтзәки Вәлиди Хөкүмәте ағзаһы булып тороуҙа ғәйепләнеп, ҡулға алына. Беҙҙең бәхеткә, 1940 йыл ул төрмәнән сығарыла, һәм беҙ шунда, Себерҙә вафат булып ҡалған әсәйемдең ҡәберен ҡалдырып, Баймаҡҡа әйләнеп ҡайта алдыҡ. 60 йылдан ашыу ғүмеремде мәғариф һәм йәмәғәтселек эшенә бағышлаған кеше булараҡ, ғәйепһеҙгә ҡулға алынып, 1937-1938 йылдарҙа атылған биш наркомдың - 30-сы йылдарҙа Башҡортостандың мәғариф буйынса халыҡ комиссарҙары булып эшләгән аҫыл шәхестәребеҙҙең аяныслы яҙмышы борсоно мине ғүмерем буйы. Мин улар хаҡында һәм, ғөмүмән, репрессия темаһына бик күп яҙҙым, золом ҡорбандарының яҙмыштарын өйрәндем, эҙләндем, бик күп мәғлүмәттәр тупланым. Әлеге быуындарға әйтер һүҙем шул: нахаҡҡа ҡорбан булған шәхестәребеҙҙе онотмайыҡ! Быны әлеге биш наркомдың исемшәрифтәрен әйтеп үтәм: Ибраһим Хафиз улы Абыҙбаев - 1901 йылда Белорет районы Сермән ауылында тыуған, 1937 йылдың 8 декабрендә атыла; Кәрим Абдулла улы Иҙелгужин, 1895 йылда Ырымбур губернаһында тыуған, 1937 йылдың 21 ноябрендә атыла; Әхмәт Рыҫмөхәмәт улы Исәнсурин - 1897 йылда Ырымбур губернаһында тыуған, 1930 йылда мәғариф буйынса халыҡ комиссары булып эшләй, аҙаҡ партия Өлкә Комитеты секретары итеп тәғәйенләнә.1938 йылдың 10 июлендә атыла; Риза Вахит улы Әбүбәкеров - 1902 йылда Салауат районында тыуған, 1930-1935 йылдарҙа мәғариф комиссары була. 1937 йылдың 3 октябрендә атыла; Ғәбәй Кирәй улы Дәүләтшин - 1893 йылда Һамар губернаһында тыуған. 1935-1937 йылдарҙа мәғариф комиссары булып эшләп йөрөгәндә нахаҡҡа ғәйепләнеп ҡулға алына һәм 1938 йылдың 9 июнендә атыла. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 1930-1950 йылдарҙа Башҡортостанда 50 меңдән ашыу кеше сәйәси репрессия ҡорбаны була. Киләсәгебеҙ - өмөтлө, бөгөнгөбөҙ сыуаҡ булһын, тиһәк, тарихыбыҙҙың аяныслы биттәренә лә йышыраҡ күҙ һалайыҡ, тимәксемен.

***Фәрит ВАХИТОВ, Республика Хәрби дан музейы хеҙмәткәре, журналист:*** Әлбиттә, Бөйөк Ватан һуғышының әсе хәтирәһе онотолорлоҡ түгел. Үҙем һуғышта ҡатнашмаһам да ( ул ваҡыт минә ни бары 8 йәш ине), гармун уйнап, йырлашып һуғышҡа киткән ир-егеттәрҙе ауыл ҡапҡаһы төбөндә оҙатып ҡалыуым бөгөнгөләй хәтеремдә. Һуғышҡа киткәндәр араһында минең бер туған Миннәхмәт ағайым да бар ине. Ат еңе ҡағылған бер кеше булды. Колхозда ат ҡараусы булып эшләп йөрөгән еренән фронтҡа оҙатылды, унда ла аттарынан айырылманы: 9-сы кавалерия полкында (ул саҡ 1926 йылғыларҙы Алыҫ Көнсығышҡа оҙатҡандар) әҙерлек үткәс, ағайым 32-се казактар полкына эләгә һәм 18 йәше тулып, бер-ике ай үткәс, 1945 йылдың 1 ғинуарында һәләк була. Үкенес, ә Еңеүгә ни бары дүрт ай ғына ҡалған була... Әйткәндәй, бына тиҙҙән, 2015 йылда, илебеҙ халҡы Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләйәсәк. Шул көн яҡынайған һайын, үҫмер генә көйө яуҙа ятып ҡалған ағайым иҫтәлеге күңелемде тағы ла нығыраҡ һыҙландыра. Ә күпме булған ундай ҡорбандар тотош дүрт йылға һуҙылған был һуғыш осоронда! Уның бер йылы ғына ла ун йылға торошло булғандыр, уйлап ҡараһаң... Ағайымдың фронттан яҙған хаттарынан, утлы яу эсенән иҫән ҡайтҡан ветерандар менән күп тапҡырҙар осрашып һөйләшеүҙәрҙән, һуғыш тураһындағы әҫәрҙәрҙән, тарихи мемуарҙарҙан тупланды хәтерҙәге был тарих. Шуға ла минә бик яҡын һәм изге был тема. Уның буйынса мин бик күп мәғлүмәттәр тупланым, мәҡәләләр яҙҙым, тик уның осона сығып етерлек түгел. Әле бына 13 йыл буйына республикабыҙҙың Хәрби дан музейында эшләп йөрөүем дә ана шул тарихҡа тоғролоҡтан, ағайым ише миллиондарҙың ҡаһармандығына һоҡланыуҙан, улар менән ғорурланыуҙан киләләр, тимен. Үҙебеҙҙең 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһын ғына алып ҡарайыҡ. Бөйөк Ватан һуғышында 100-ләгән ана шундай дивизия булған һәм уларҙан бөтәһе 106 яугир Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған. Ә бит шуларҙың 78-е - башҡорт атлылары! Ғорурланмаҫлыҡмы ни был факт! Мин заманында "Беҙ - шайморатовсылар" тип хаҡлы рәүештә күкрәк ҡағып йөрөгән бик күп ағайҙарҙы - ветерандарыбыҙҙы белә инем. Бына ошондай ҡаһарман яугирҙар дивизияһының арыҫлан йөрәкле командиры - генерал Минлеғәле Шайморатовҡа юҡҡа ғынамы ни беҙ Герой исеме юллайбыҙ?! Тик был эште туҡтатып ҡалдырырға ярамай, тарих хәтере тере. Мәгәр уның хаталарын төҙәтергә бер ҡасан да һуң түгел.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҮЛСӘП БИРӘ...

Хоҙай Тәғәлә кешегә һәр нәмәне үлсәп бирә, тиҙәр. Эсер һыуын да, ашар ризыҡын да. Уларҙы ни тиклем тиҙерәк исраф итәһең, шул ҡәҙәре ҡыҫҡара, имеш, ғүмерең. Шулайҙыр. Күптәрҙең ғүмере ҡасан, нисек бөтөрө ҡылыҡтарына яҙылған була бит.

Бер танышым һөйләй: "Сәлихйән беҙгә килһә, мотлаҡ ваннала йыуынып китә торғайны. Уның ваннала шул тиклем оҙаҡ тотҡарланыуына, һыуҙы шабырҙатып самаһыҙ ағыҙыуына өйрәнеп бөткәйнек. Уның фажиғәле үлемәнән һуң шуны уйланым: үҙенә тәғәйен һыуҙы шулай күпләп исраф итеп бөткәнгә лә теге донъяға тиҙерәк күскәндер, күрәһең..."

Тағы ашауға шул ҡәҙәре ҡомһоҙ кешеләр була. Донъяла ашауҙан башҡа бер ни юҡ һымаҡ улар өсөн. Минең бер танышымдың ашарға яратыуына гел иғтибар итә инем. Өйөндә аш әҙер булмаһа, йөҙө ҡаса, ҡыҫҡырына, ғауға сығара торғайны. Ә бит тәбиғәте менән күңелсәк, изгелекле, талантлы кеше ине, мәрхүм. Ғаиләләге төрбиәлә яңылышыу ғәләмәте булғандыр был, тип уйлай инем гел генә. Төпсөк бала булараҡ, уны айырып иркәләү, айырып иң тәмлене ашатыу сәбәпселер, бәлки, быға...

Нисек кенә булмаһын, үҙеңә тәғәйенде самалап тотоноу кәрәк шул...

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға республика Хөкүмәтенең 2012 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында отчет тәҡдим итте. Йылға йомғаҡ яһау башҡарма власть башлығы менән парламентарийҙар араһында тәүгә диалог формаһында үтте. "Беҙҙең өсөн, тәү сиратта, республикала үткәрелгән дәүләт сәйәсәтенең төп демографик күрһәткестәре - халыҡ һанына, тыуымға, ғүмер оҙайлығына нисек тәҫьир итеүе мөһим, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Былтыр 59 мең сабый тыуған. 1991 йылдан алып был иң яҡшы күрһәткес. Халыҡтың тәбиғи артыуы 5600 кеше тәшкил итте".

✓Башҡортостан Президенты Указы менән республиканың Рәсәй Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Олег Матыцин Башҡортостан Республикаһының РФ Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле вазифаһын башҡарыусы - республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде.Башҡортостан Президентының икенсе бойороғо менән Рөстәм Вилданов Башҡортостандың Рәсәй Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиленең беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Эльвира Нәбиуллина кандидатураһын Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкы рәйесе вазифаһына тәғәйенләү өсөн тәҡдим итте. РФ Үҙәк банкының ғәмәлдәге башлығы Сергей Игнатьев вәкәләттәре 2013 йылдың 24 июнендә тамамлана. РФ Президенты билдәләүенсә, әлеге кандидатура Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 83-сө статьяһындағы "г" пунктына, шулай уҡ "Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкы (Рәсәй Банкы) тураһында"ғы Федераль закондың 14-се статьяһына ярашлы тәҡдим ителә.

✓20-26 апрелдә Башҡортостанда матур йолаға әүерелгән "Парктар маршы" республика акцияһы ойоштоорла. Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, дәүләт тәбиғәт ҡурсаулыҡтарына, "Башҡортостан" милли паркына, тәбиғәт парктарына, заказниктарға, балалар экология ойошмаларына һәм йәмәғәт берләшмәләренә үҙҙәренең биләмәләрендә акциялар үткәреү буйынса саралар планын раҫларға тәҡдим ителде. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы 10 июнгә тиклем "Парктар маршы-2013" акцияһына йомғаҡ яһаясаҡ.

✓ *Ҡатын ҡағыҙҙы асып ҡараған һәм ундағы яҙылған һүҙҙәрҙе уҡып, ҡолап китә яҙған: "Ауырыуға күрһәтелгән хеҙмәт бер стакан һөт менән тулыһынса түләнде", тип яҙылған булған унда.*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ӘСӘ ҺӨТӨ МЕНӘН ИНМӘГӘН...

## кәзә һөтө менән инмәй

**Был әйтемде икенсе төрлөсә "Ана һөтө менән инмәгән - тана һөтө менән инмәй" тип тә әйтәләр. Бер һүҙ менән әйткәндә, бында һүҙ кешегә әсә һөтө менән генә тапшырыла торған ҡиммәттәр һәм төшөнсәләр хаҡында бара. Урынлы һорау тыуа: сит әсәнең күкрәк һөтө менән балаға уның да күркәм сифаттары күсәме икән? Был һорауға яуап бирер өсөн бер фәһемле ваҡиғаның юҫығына күҙ йүгертәйек.**



Бер ҡалала етем генә малай йәшәгән. Аслы-туҡлы көн итеүенә ҡарамаҫтан, уның уҡырға, белем алырға ынтылышы көслө булған. Хатта үҙенең мәктәптә уҡыуғаны өсөн түләргә аҡса эшләү маҡсатында өйҙән-өйгә ваҡ-төйәк әйберҙәр һатып, ҡыръ-тартмасы булып йөрөгән. Бик тырыш, теремек малай булған ул. Шулай сираттағы сауҙа эшендә йөрөгәндә ул үҙенең ныҡ ҡына асығыуын тойған. Малай хәле бөтә башлағас, бер йорттоң тупһаһына килеп йығылған. Шунда ятып бер аҙ хәл алғас, йорттоң ишеген туҡылдатып, ярҙам һорарға, саҡ ҡына, үлмәҫлек кенә булһа ла тәғәмләнергә уйлаған. Ишекте мөләйем йөҙлө бер ҡатын асҡан һәм малайҙың хәленең мөшкөл икәнлеген аңлап, уға бер стакан һөт эсергән.

-Кеҫәмдә бер тин генә аҡсам бар, һеҙгә һөт өсөн күпме түләргә һуң? - тип һораған һөттө бер тынала күтәреп эсеп, һөйләшерлек хәлгә килгән малай ҡыуанып.

-Бер тин дә кәрәкмәй, мин бит был һөттө һиңә хәлең әҙ генә булһа ла еңеләйһен өсөн ысын күңелдән эсерҙем. Башҡа ризығым да юҡ, - тигән ҡатын.

Атҡа атланғандай ҡыуанған малай ҡатынға ысын күңелдән рәхмәт әйтеп, изге кешене юлына сығарған өсөн Хоҙайға рәхмәт әйтеп, доғалар бағышлап китеп барған. Был ваҡиға малайға шундай рухи һәм физик көс биргән. Ул донъяла изге кешеләр барлығына ҡыуанып, тағы ла тырышыбыраҡ уҡып, мәктәпте яҡшы тамамлап, тағы ла шундай уҡ тырышлыҡ менән медицина институтында белем алып, доктор булып киткән.

Йылдар үткән. Ҡасандағылыр малай күптән инде урта йәштәрҙәге кешегә әүерелеп, бәхетле ғаилә ҡороп, һөнәре буйынса абруйлы дәрәжәләр яулап, ҙур ҡала дауаханаһында эшләп йөрөгәнендә уның клиникаһына сит ҡаланан ауыр хәлдәге ҡатынды килтереүҙәре хаҡында әйткәндәр. Доктор пациентының документтарына күҙ һалһа, ундағы адреста үҙенең тыуған ҡалаһы атамаһын уҡыған. Шунан ул ҡаты ауырыусының хәле менән яҡындан танышыу маҡсатында палатаға ингән һәм ҡасандыр үҙен ҡотҡарыусы теге ҡатынды таныған. Ҡатындың хәле, ысынлап та, үҙе көткәндән дә аянысльраҡ икәненә инанған доктор. Әммә ул клиникаһында йоҡлап тиерлек эшләп, үҙенең бар тәжрибәһен һәм иғтибарын шул ҡатынды аяҡҡа баҫтырыуға һалған. Ситтән тәжрибәле табиптар саҡырып, консилиумдар үткәреп, ҡатынды һауыҡтырыуҙың һөҙөмтәле юлдарын, ысулдарын эҙләгән. Уның тырышлығы бушҡа ситмәгән. Сир сигенгән. Ҡатын аяҡҡа баҫҡан һәм палата буйлап йөрөргә тотонған. Тик, ниңәлер, доктор ҡатынға үҙенең кемлеген әйтмәгән. Дөрөҫөрәге, ҡатынды башҡалар алдында уңайһыҙ хәлгә ҡуйырға теләмәгән. Ҡатын тулыһынса һауығып, өйөнә ҡайтып китер алдынан клиниканың финанс белгесе докторҙың кабинетына ауырыуҙы хеҙмәтләндереү өсөн түләнергә тейешле булған квитанцияны тотоп ингән. Доктор унда түләнәсәк сумманы күрһәтеп, ҡултамғаһын һалырға тейеш икән. Ул квитанцияға ҡултамғаһын ҡуя һәм ниндәйҙер һүҙҙәр өҫтәп яҙа.

Ҡатын үҙен ҡотҡарыусы докторға һәм башҡа клиника хеҙмәткәрҙәренә рәхмәттәр әйтеп, улар менән хушлашҡандан һуң, өр-яңынан тыуғандай, ҡыуанып-шатланып вокзалға йүгергән. Уның яңы тормош башлауынан тыуған шатлығы шул тиклем көслө булғандыр, ул фәҡәт үҙе йәшәгән ҡалаға ҡайтып етеп, фатирына ингәс кенә квитанцияны иҫенә төшөргән. Ҡатын ҡағыҙҙы асып ҡараған һәм ундағы яҙылған һүҙҙәрҙе уҡып, ҡолап китә яҙған: "Ауырыуға күрһәтелгән хеҙмәт бер стакан һөт менән тулыһынса түләнде", тип яҙылған булған унда.

Ҡатындың шатлыҡ йәштәре йылға булып аҡҡан. Сөнки квитанцияны асып ҡарар алдынан уны икенсе бер борсолоу ҙа солғап алған булған. Уның яҡынса иҫәпләүҙәре буйынса, ҡатынға бөтөн ҡалған ғүмере буйына пенсияһынан өҙөп-йолҡоп доктор күрһәткән хеҙмәт өсөн түләргә тура килер ине. Икенсенән, ҡатын бынан күп йылдар элек бер етем малайға ярҙам итеп ебәреүен иҫенә төшөргән һәм шунда уҡ Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт һүҙҙәрен яуҙырырға тотонған. Иң мөһиме, ҡасандыр йорт ишеген ҡаҡҡан арыҡ малайға ҡатын үҙенең күкрәк һөтөн эсергән икән. Был ваҡытта инде ҡатындың ул саҡтағы сабыйы үҫеп етеп, кеше булып алыҫта йәшәгән.

Бында, әлбиттә, барыһынан бигерәк күкрәк һөтөнөң ниндәй илаһи ҡөҙрәткә эйә булыуы хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Ғалимдар донъяға тыуып, тәне, килбәте, булмышы формалашыуҙа сабыйға күкрәк һөтөнөң ни тиклем кәрәк һәм мөһим булыуы хаҡында ҡалын-ҡалын китаптар ижад иткән. "Күкрәк һөтө имеп үҫкән баланың иммунитеты ныҡ була, ул бер ниндәй ҙә ауырыуҙарға бирешмәй. Күкрәк һөтө сабыйҙы бигерәк тә инфекцияларҙан, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан, шәкәр диабетынан һаҡлай. Ундай бала һау-сәләмәт була, күкрәк һөтөндә кальций, лактоза, таурин, липид, иммуноглобулин, лактоферрин кеүек башҡа бик күп элементтар, ферменттар һәм витаминдар күп булғанлыҡтан, күкрәк һөтө үҙе генә лә тотош медицина пакетын алмаштыра ала... " тигәнде генә әйтеп китеү ҙә күпкә ишара.

Ҡыҫҡаһы, күкрәк һөтөнөң әһәмиәте бәхәсһеҙ, был -аксиома. Шуға күрә мин бында медицинаны саҡ ҡына ситкәрәк ҡуйып, әсә һөтө төшөнсәһенең икенсе бер аспекты хаҡында һүҙ алып барыуҙы урынлы һанар инем. Ул, әлбиттә, тәрбиә нигеҙе булған ғаиләнең, әсәй наҙының, атай хәстәрлегенең рухи аспекты. Миңә ҡалһа, әйтемдәге төп фекер һәлмәклеге тап ошо рухи тәрбиәгә ҡайтып ҡала ла инде.

Бер генә миҫал. Һуңғы йылдарҙа - ул элегерәк тә шулай ине - ата-әсәләрҙең ҡайҙалыр хеҙмәт итеүен сәбәп итеп килтереп, иң төп тәрбиә бурысын мәктәпкә һәм мәктәпкәсә учреждениеларға ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Әммә тормош һәм ваҡыт бының киреһен дә раҫлай килә. Ни өсөн тигәндә, әгәр ҙә балаға тәрбиә нигеҙе тыуғанға тиклем һәм тыуғас та ғаиләлә һалынмаһа, булмаған нигеҙгә мәктәп нимә ултырта ала тиһегеҙ? Ярай, әйтәйек, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы тырышып-тырмашып, бар күңелен һәм ваҡытын биреп, балаға мәктәптә ниндәйҙер белем һәм тәрбиә бирҙе, ти. Әммә был белем һәм тәрбиә ата-әсәнең интеллектуаль һәм рухи кимәле менән нығытылмаһа, мәктәптә тырышып уҡып, ҙур өмөттәр менән үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡан бала тормошҡа әҙер булмай сыға.

Туған телгә, мәҙәниәткә, сәнғәткә мөнәсәбәт йәһәтенән дә мәсьәләләр шулай уҡ тора. Был тормоштоң кешелек яратылғандан алып һаҡланып килгән тәртибе, дөрөҫөрәге, тәртипһеҙлеге: "Әсә һөтө менән инмәгән - кәзә һөтө менән инмәй..."

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Ял көндәрендә республикала һиҙелерлек һыуытасаҡ. Термометр бағанаһы төндә - минус 13 градусҡа, ҡайһы бер райондарҙа минус 20 градусҡа тиклем төшәсәк. Көндөҙ сағыштырмаса йылы - минус биштән плюс ике градусҡа тиклем буласаҡ.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк башҡарма комитетында "Ныҡлы ғаилә" федераль проектының эш төркөмө ултырышы үтте. Проект координаторы, Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова раҫлауынса, бурыс - ғаиләләр тарҡалмаһын, балалар ғазапланмаһын, интернаттарға эләкмәһен өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләү. "Ныҡлы ғаилә" проекты сиктәрендә республиканың дөйөм белем биреү мәктәптәрендә ғаилә тәрбиәһе дәрестәрен индерергә тәҡдим ителде.

✓29 мартта Өфөлә наркотиктар әйләнешенә контроллек итеү органдары булдырылыуына 10 йыл тулыуға арналған ике көнлөк автоуҙыш үтә. Сараны ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, автоуҙыш Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәге, атап әйткәндә, Шаран һәм Мишкә райондары буйлап үтәсәк. Автоуҙыш иртәнге сәғәт 9-ҙа Конгресс-холл бинаһы янында старт ала.

✓1 апрелдә "Беҙ - Рәсәйҙең күп милләтле халҡы" бөтә Рәсәй ғилми һәм публицистик эштәр конкурсы старт ала. Уны ойоштороусылар булып РФ Президенты янындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет, РФ Йәмәғәт палатаһы, Рәсәй халыҡтар дуҫлығы университеты сығыш яһай. Бәйге күп милләтле халыҡтың берҙәмлеген, граждандарҙың ватансылыҡ тойғоһон, намыҫ һәм выжданын нығытыуға йүнәлтелгән. Конкурсҡа йомғаҡ яһау һәм еңеүселәрҙе тәбрикләү тантанаһы 4 ноябрҙә Дәүләт Кремль һарайында үтә.

✓Өфө ҡалаһының Ленин һәм Октябрь райондарындағы яңы урамдарға билдәле сәйәси эшмәкәрҙәрҙең исемдәре биреләсәк. Бындай ҡарар Өфө ҡала округы Советы ултырышында ҡабул ителде. Өфө ҡалаһы Ленин районының Затон-Көнсығыш биҫтәһендәге яңы урам Михаил Зайцев исемен йөрөтәсәк. Абдулла Сәиди һәм Валерий Кокин урамдары Октябрь районы Нуғайлы ауылының 33-сө һәм 36-сы кварталдарында барлыҡҡа киләсәк.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҮҘ РИЗЫҒЫҢ...

## үҙәктә

**Һуңғы ваҡытта урындағы етештереүсегә иғтибар бермә-бер артты кеүек. Республика етәксеһе лә, ниндәй генә районда булмаһын, магазин кәштәләрендә урындағы етештереүсенең продукцияһы барлыҡына-юҡлығына иғтибар итә. Ләкин тотош ил буйынса федераль сауҙа селтәрҙәре (супер- һәм гипермаркеттар) киң ҡолас менән тәҙәлгәндә, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүгә йүнәлеш алған үҙ эшҡыуарҙарыбыҙға иғтибар етерлекме икән? Журналистр менән осрашыуҙа ҡала округы хакимиәте башлығы урынбасары Марат Ғәлиуллин ҡулланыу тауарҙары һәм хеҙмәте баҙарының эшмәкәрлеге йомғаҡтары менән таныштырып ҡына ҡалманы, республика етештереүсеһенең хәл-торошона ла күҙ һалдырҙы.**

Бөгөн урындағы етештереүсегә ярҙам, нигеҙҙә, мәғлүмәт ярҙамына ғына ҡайтып ҡала. Федераль сауҙа селтәрҙәре үҙ кәштәләрендә Башҡортостан тауарҙарына ла тейешле киммәлдә урын бирергә вәғәҙә итһә лә, ысынбарлыҡта был һүҙҙә генә. Әлбиттә, үҙ ерлегебеҙҙә етештерелгән продукцияны ҡулланыу республиканың имиджын да күтәрер, иҡтисадҡа ла йоғонто яһар, иң мөһиме, халыҡтың һаулығына зыян килтермәҫ ине. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитетында продукттарға "Башҡортостан тауары" тигән билдә һалыуға рөхсәт алыуға ғаризалар ҡабул ителә. Проекттың төп маҡсаты - ҡулланыусыларҙың иғтибарын үҙебеҙҙә етештерелгән сифатлы продукцияға йәлеп итеү, уны эске һәм тышҡы баҙарға сығарыу.

Шулай уҡ Марат Мөҙәрис улы белдереүенсә, сауҙа һәм хеҙмәт күрһәткестәрен "өс кит" күтәреп тора: ваҡлап һатыу, йәмәғәт туҡланыуы әйләнеше һәм хеҙмәт күрһәтеү. Ошо өс өлкә ҡаланың бюджетын формалаштырыуҙа ла билдәле бер роль уйнай. Халҡы миллион тип һаналған ҡалалар араһында ла һуңғы йылдарҙа Өфө тәүге өс урындан ҡалғаны юҡ. Һәр тармаҡҡа айырым күҙ һалғанда, ваҡлап һатыу тауар әйләнеше буйынса баш ҡалала былтыр үҫеш 4,5 процент тәшкил иткән. Йән башына тауар әйләнешен ҡарағанда инде, был бер кешегә 339 468 һум тигән һүҙ. Ваҡлап һатыуҙың республика әйләнешендә Өфөнөң өлөшө 58 процент тәшкил итә.

Йәмәғәт туҡланыуы буйынса ла үҫеш (4,1 процент) күҙәтелә. Был тармаҡта йән башына әйләнеш 14218 һум тура килә. Һуңғы йылдар хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә лә үҫеш булыуын дәлилләй. Бөгөн хеҙмәт күрһәтеү өлкәһе күләме 14 миллиард 38 миллион һум, йән башына 12 945 һум, тәшкил итә.

Әле тауар һәм хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә барлығы 4717 (2011 йыл менән сағыштырғанда 151-гә күберәк) сауҙа предприятиеһы, 1262 (44-кә күберәк) йәмәғәт туҡланыуы предприятиеһы (шуларҙың 605-е дөйөм ҡулланыуҙағы селтәргә ҡарай, 2228-е - шәхси эшҡыуарҙар ҡулында) иҫәпләнә.

Былтыр төрлө форматтағы дөйөм майҙаны 80 мең квадрат метр тәшкил иткән 139 яңы сауҙа объекты файҙаланыуға тапшырылған. Был 2000 кешегә яңы эш урыны булдырылған тигән һүҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ХАЛЫҠ ӨСӨН ЭШЛӘРГӘ!



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың ҡала Советының сираттағы ултырышындағы сығышы БР Президентының БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һәм халыҡҡа тап "Халыҡ өсөн эшләргә!" тип аталған Мөрәжәғәтнамәһен тормошҡа ашырыу буйынса комплекслы саралар программаһы үтәлеше һәм ошо йүнәлештә муниципалитеттың эшмәкәрлеге тураһында булды. Был аңлашыла ла, сөнки йылдың беренсе кварталы, ғәҙәттә, үткәндәргә йомғаҡ яһау, ошо арауыҡта осраған етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, киләсәккә яңы пландар, эш йүнәлешен асыҡлау осоро ул.**

Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, бөгөн хакимиәттең төп маҡсаты - Өфөнө йәшәү, хеҙмәт итеү һәм эшҡыуарлыҡ өсөн уңайлы ҡалаға әйләндереү. Тап шундай күҙаллау артабанғы эшмәкәрлекте билдәләй. "Киске Өфө" гәзите биттәрендә баш ҡаланың төрлө тармаҡтағы ҡаҙаныштары аҙна һайын уҙғарылған матбуғат конференцияларынан һуң даими яҡтыртылып барҙы, шуға ла ҡала хакимиәте башлығының докладында тағы бер тапҡыр яңыраған һандарға һәм уңыштарға артыҡ туҡталмай, шуны ғына билдәләп китеү зарур: былтыр Өфө халҡы миллион булған Рәсәй ҡалалары араһында лидерҙар рәтен генә түгел, динамикалы үҫеш темптарын да һаҡлап ҡалыуға өлгәште. Шулай уҡ инвестициялар йәлеп итеү буйынса ла эҙмә-эҙлекле эшмәкәрлек алып бара. Әгәр былтыр йәлеп ителгән инвестициялар күләме 94 миллиард самаһы тәшкил итһә, быйылға был сик 100 миллиард күләменә күтәрелгән.

Ҡала округы хакимиәте эшмәкәрлегендә һынылышлы осор - ул алдынған өлөшсөләр менән килеп тыуған проблеманы хәл итеү булды. Йәйләп был категорияға ҡараған кешеләр фатирлы була башлаған. Тимәк, халыҡтың властарға ышанысы ла арта. Быны граждандарҙың хакимиәткә мөрәжәғәттәре лә раҫлай. Йыл эсендә халыҡтың яҙма мөрәжәғәте 30 процент самаһына артып, 39 меңгә еткән. Һәм уларҙың һәр ҡайһыһы буйынса ниндәйҙер ярҙам булған. Шуғалар ҙа, Өфө республика буйынса уҙғарылған рейтингта иң һөҙөмтәле ҡала округы тип баһаланған.

Үҙ сығышында Ирек Ялалов ағымдағы йылға өҫтөнлөклө пландар менән дә таныштырҙы. Уҙған йылдағыса, быйыл да муниципалитеттың эшендә иң өҫтөнлөклө йүнәлеш булып кеше, уның социаль именлеген һәм юғары сифатлы йәшәйешен тәьмин итеү торасаҡ. "Беҙ ҡала халҡына хәүефһеҙ һәм уңайлы тормош, иртәгәһе көнгә ышаныс тойғоһо тәьмин итергә тейешбеҙ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Стратегик планлаштырыуҙа "ҡала миссияһы" тигән төшөнсә бар. Мин уны үҙем өсөн ҡуптан билдәләп ҡуйғанмын: Башҡортостандың баш ҡалаһы илдең иң яҡшы ҡалаһы булырға тейеш. Беҙ өфөләр өсөн эшләйбеҙ һәм уның һәр кешеһе үҙенең һәләтен һәм мөһимлеген күрһәтеү мөмкинлегенә эйә булырға, бының өсөн барлыҡ шарттары булған үҫеш моделен тергеҙергә, Өфөнө һәр кеше өсөн дуҫтарса мөнәсәбәттәге ҡала итергә тейешбеҙ".

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ХОККЕЙ

# ЛАЙЫҠЛЫ ЕҢЕЛДЕЛӘР

**КХЛ-дың иң көслө командалары иҫәбендә булған "Салауат Юлаев" һәм "Ак барс" араһындағы ҡыҙыу уйындар бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Был - тәбиғи, сөнки Өфө һәм Ҡаҙан командаларының һәр уйыны үҙенең көсөргәнешлеге, ҡыҙыулығы, ҡатылығы, уйынсыларҙың һәр гол өсөн ныҡышмалы көрәшеүе менән айырылып тора. Ярымфинал уйындары ла был ҡағиҙәнән ситләшмәне һәм көйәрмәндәргә матур уйын минуттары бүләк итте. "Салауат Юлаев" һәм "Ак барс" бары тик етенсе матчта ғына ярымфиналдың еңеүсеһен асыҡлай алды.**

Һуңғы уйындың еңел булмаясағын аңлаған ике команда ла алышҡа бар көстәрен һәм оҫталығын һалды. Тәүге осор, көслө һөжүм итеүҙәренә ҡарамаҫтан, "Ак барс"тарға мәрәй килтермәне, ә юлаевсылар иҫәпте асыуға өлгәште.

Икенсе осорҙоң тәүге минуттарында Ҡаҙан командаһы иҫәпте тигеҙләүгә өлгәшһә, бер минуттан юлаевсылар тағы ла алға сыҡты. Ҡаҙан көйәрмәндәре борсолорға ла өлгөрмәне, Валерий Белов хоккейсылары тағы ла иҫәпте тигеҙләне. Осор уртаһында Игорь Мирнов Константин Барулин ҡапҡаһына тағы бер мәрәй оҙатты һәм иҫәпте 3:2 итеүгә өлгәште. Әлбиттә, "Ак барс"тарҙы был иҫәп шатландырманы һәм осор бөтөүгә ете минут ҡалғас, Иро Таркки ҡапҡаһына өсөнсө шайба оҙатылды.

Өсөнсө осорҙа тигеҙ иҫәп оҙаҡ һаҡланманы, уйын башында уҡ ҡаҙанлылар үҙҙәренең иҫәбенә бер мәрәй яҙып ҡуйҙы. Юлаевсылар башҡаса иҫәпте тигеҙләй алманы. "Ак барс" уңышлыраҡ уйнаны булып сыҡты, уйын хужалар файҙаһына 4:3 иҫәбе менән тамамланды. Гагарин кубогы өсөн артабанғы алышты Силәбенең "Трактор"ы менән "Ак барс"тар дауам итәсәк, ә юлаевсылар өсөн быйылғы миҙгелдә уйындар тамам.

Регуляр чемпионатта һәм плей-офф уйындарының ярымфиналында күрһәткән уйындары өсөн беҙ, көйәрмәндәр, яраткан командабыҙ "Салауат Юлаев"ҡа оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Киләсәктә "Йәшел машина" үҙенең көсөн, ҡеүәтен һәм оҫталығын мотлаҡ күрһәтәсәк һәм еңеү шатлығын бүләк итәсәк әле. Бары тик ышанырға ғына кәрәк.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәскәү өлкәһенең Ногинск ҡалаһында үткән Профессиональ бокс буйынса халыҡ-ара турнирҙа башҡорт боксеры Денис Шафиҡов Тагилдан килгән үзбәк боксеры Алишер Рәхимов менән көм һынашты һәм уны еңеп сыҡты.

✓Республиканың 16-35 йәштәрҙәге шағирҙары "Мяуфест 4" йәштәр шиғриәте фестивалендә ҡатнашыуға саҡырыла. Бәйге М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башланғысы менән ойоштоpола. Фестивалдә ҡатнашыу өсөн almey@mail.ru электрон адресына заявка һәм шиғырҙар шәлкемен ебәрергә кәрәк. Беренсе этап 30 мартта 16-19 сәғәттәрҙә БДПУ-ның 3-сө корпусында 401-се бүлмәлә үтә.

✓Башҡортостанда 7528 күп балалы ғаилә булһай ер участкалары алды. Был булһай ер участкаһы алыу өсөн иҫәпкә ҡуйылған барлыҡ күп балалы ғаиләләрҙең 47,2 процентын тәшкил итә. Бындай мәғлүмәт менән Өфөлә Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле ярҙамсыһы Юрий Золотарев таныштырҙы. Белешмә өсөн. Бөгөнгө көндә Башҡортостанда 36699 күп балалы ғаилә йәшәй, уларҙың 9069-ы торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булараҡ иҫәптә тора.

✓Мәсетле районында ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр төбәк-ара конкурсы булып үтте. Мәртәбәле бәйгелә Башҡортостан райондарынан тыш, Силәбе өлкәһенән, Пермь крайынан, Алтай, Тыва, Саха-Яҡут республикаларынан, шулай уҡ Мәскәүҙән дә ҡатнашыусылар булды. Быйылғы конкурсҡа йәмғеһе 300-ҙән ашыу бәйгесе килгәйне.

✓Өфөләге белем биреү учреждениеларының театр коллективтары 22 мартта "Алтын битлек" ҡала конкурсының төп призы өсөн көс һынашасаҡ. Һәр райондан иң күбендә өс ғариза ҡабул ителә. Йәмғеһе биш номинация ҡаралған. Конкурс Өфөнөң 26-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбендә үтә. Башлана - 10 сәғәттә. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефон: 248-48-30.

✓Башҡортостанда экологик өмәләр 13 апрелдә башлана. Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, ҡала һәм ауыл биләмәләрен сүп-сарҙан таҙартыу, тәҙеклендереү һәм йәшелләндереү буйынса акциялар 18 майға тиклем дауам итәсәк.

✓ Шулай ҙа "Шаяниум"да ҡатнашыусыларҙың мәктәп уҡыусылары икәнлеген онотторға ярамай. Таяҡтарҙы үтә бөгөп, балаларҙы рәнйетеп, күңелдәрен төшөрөп ҡуймайыҡ. Еңелеүҙе лә, еңеүҙе лә дөрөҫ аңлатайыҡ.



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Баш ҡала ла ун беренсе тапҡыр уҙғарылған, Өфөнөң башҡорт балалары араһында ғына түгел, хәҙер инде дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнгән башҡа милләт балаларында ла популярлыҡ яулаған "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсында был юлы 62 команда һәм 700-ҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Ә финалда иһә Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге республика художество гимназия-интернатының "Рәссамдар", Дим бистәһендәге 102-се башҡорт гимназияһының "Етегән + бер", М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының "Һупайлы дәрүиштәре", М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Кендектәр", Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге гимназия-интернаттың "Ҡыҙыҡ мажор", Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.ру" командалары осрашты.**



# ШАЯНДАР ҺӘМ ОТҠОРҘАР...

## юмор менән йөкмәткене йәнәш атлатты

"Шаяниум" бер тынала үтте. Тамашасы оҙон-оҙаҡҡа һуҙылып киткән тынлыҡтарҙы, улар араһындағы ауыр, ризаһыҙ көрһөнөүҙәрҙе ишетмәне. Ҡатнашыусылар тамашасыларҙы ярыш көсөргәнешендә тотто, күңелһеҙләнергә, йоҡомһорарға ирек бирмәне. Тоноғораҡ тойолған сығыштар ҙа сәхнәлә уйнаусыларҙың уңышлы импровизацияһы һәм быны лайыҡлы баһалаған тамашасыларҙың алҡыштары менән йәнләнде. Юмор менән йөкмәтке йәнәш атланы. Ҡайһы бер күҙәтеүселәр һәм көйөрмәндәр быйылғы сараны үткән йылдағынан бер аҙ ҡайтышыраҡ булды, тип иҫәпләй иҫәпләүгә. Ә шулай ҙа башҡорт шаяндары һәм отҡорҙарының бер кимәлдә ҡалмауы, үҫеш юлдарын эҙләүе, яңы баҫҡысҡа күтәрелеү әмәлдәрен ҡайғыртыуы һиҙелде барыбер ҙә.

Йәнә, башҡорт юморының үҙ йөҙө формалаша бара шикелле. Элегерәк башҡортса шаяртыуҙар үтә етди, урыҫсанан күсерелгәндәре - мәғәнәһеҙ яңғыраһа, бөгөн туған телебеҙҙәге шаяртыуҙарҙың халыҡсан ерлеккә яҡыная барыуы һиҙелә. Шаяндар һәм отҡорҙар уйындарының башҡорт контенты үҫә барыуы ла һуңғы роль уйнамайҙыр. Ни тиһәң дә, "Шаяниум"дан тыш, "Шаян уйын", "Асыҡ КВН лигаһы"ла үткәрелә бит. Әлеге ярыштар, дөрөҫ ҡоролоп, кәрәкле йүнәлештә ойошторолғанда, халҡыбыҙҙың менталитетына, юмор традицияларына ҡаршы килмәгәндә, Алдар менән Ерәнсә мәктәбенең киләсәге алда әле.

Уйынға бер аҙ күҙәтеү яһағанда, былтырғы чемпиондар "Ҡыҙыҡ мажор"ҙың сығыштары үҙенсәлекле булыуы менән айырылып торҙо. Уларҙың Башҡортостан юлдаш телевидениеһының интернет селтәрендә күп бәхәс тыуҙырған "Уңған килен" тапшырыуын эләкләгән сығыштары, был тапшырыуға ҡарата әйтелгән тәрттәрөүҙәре һәлмәк кенә булды. Тапшырыуҙың алып барыусыһын эләкләүсе Филүзә Рәшитова ҙур осталыҡ һәм юмор аша башҡорт килене ундай булырға тейеш түгеллегенә ишараланы. Был миниатюра Беренсе ҡаналда барған "Ҙур айырма" тапшырыуы рухында ҡоролдо һәм "Ни өсөн урыҫ тапшырыуҙарын эләкләйһегеҙ? Башҡортостан юлдаш телевидениеһында тапшырыуҙар бөткәнме?" тип тәнҡитләүселәргә лайыҡлы яуап булды.

"Башҡорттар.ру" ниндәй состав менән генә сығыш яһамаһын, барыбер иң берҙәм, эҙмә-эҙлекле, "Шаяниум"дың иң тотороҡло командаһы икәнен йәнә бер тапҡыр иҫбат итте. Конкурстың тәүге йылдарында "Башҡорттар.ру" менән "ХХ централ" араһындағы ярыш иң көсөргәнешлеһе, иң сағыуы була торғайны. Был командалар юғары баҫҡысҡа күтәрелмәгән йылдарҙа ла улар араһындағы ярыш дарманы бар "Шаяниум"ды биҙәне. РБЛИ уҡыусылары һәр саҡ артислыҡ оҫталығы менән алдырҙы, шулай ҙа йөкмәткә ҡайтышыраҡ була торғайны. Ә "ХХ централ" башҡорт рухлы команда булыуы менән айырылып торҙо. Ләкин быйыл бындай ярыш сәмен күҙәтергә яҙманы, 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының "ХХ централ"ы финал ярыштарына үтмәне. Сығыштары рухлы була тороп та, юморы етеңкерәмәй, тинеләр. Инде оҫта ғына "Шаяниум"сы булып етешкән балаларҙың күңелен төшөрмәҫкә кәрәк ине. Һайлап алыу турының тотош йәштәрҙән торған баһалама ағзалары, күрәһең, йәш кешеләрҙең ҡанатын һындырырға ярамай, тигән ҡағиҙәне үҙләштереп етмәгәндәрҙәндер...

Әлбиттә, тәнҡиттәр буласаҡ. Мәҫәлән, элекке "шаяниум"сылар, ҡайһы бер сығыштарҙа плагиат шәйләп ҡалыуҙарын һәм айырым командаларҙың ярыш этабының темаһына тура килмәгән номерҙар ҡуйыуын билдәләп үтте. Тәнҡитселәр сығыштарҙың йөкмәткеһенә лә ҡағыласаҡ: ул урыны менән шыйығыраҡ булды шул. Араласыу, мәрәкәләргә килгәндә, был тәңгәлдә лә урыҫ йоғонтоһонан ҡотолоу йүнәлешендә эшләйһе бар әле. Башҡорт телен шымартыу, "сүп-сарҙан" арындырыу кәрәклеге тураһында тағы бер тапҡыр иҫкәртеү ҡамасауламаҫ. Шулай ҙа "Шаяниум"да ҡатнашыусыларҙың мәктәп уҡыусылары икәнлеген онотторға ярамай. Таяҡтарҙы үтә бөгөп, балаларҙы рәнйетеп, күңелдәрен төшөрөп ҡуймайыҡ. Еңелеүҙе лә, еңеүҙе лә дөрөҫ аңлатайыҡ. Баһалама иһә, ул сағыштырмаса дәүмәл, бер һүҙ менән әйткәндә, һәр кешенең, шул иҫәптән баһалама ағзаларының да зауығына буйһона. Тик тағы бер мөһим нәмәне лә күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ: "Шаяниум" ойошторолған саҡта уның бер маҡсаты - балаларыбыҙҙа милли, илһөйәрлек рухы тәрбиәләү ине. Ләкин был маҡсаттың үтәлеше күләгәлә ҡала шикелле, баһалау һөҙөмтәһендә сағылмай. "Үҙемдеке- үҙемдеке түгел", принцибынан арынып, юмор, оригиналлек, артислыҡ янына "милли рух" тигәнде лә йәнәш ҡуйыу бик отошло булыр ине.









**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**"Шаяниум-2013" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсының финал ярыштары һөҙөмтәләре буйынса, 1-се урын - "Ҡыҙыҡ мажор"ҙарға, 2-се урын - "Кендектәр"гә, 3-сө урын "Һупайлы дәрүиштәренә" бирелде. Ә гран-при иһә, биш йылдан һуң Черниковкаға, "Башҡорттар.ру" командаһына әйләнеп ҡайтты. "Иң яҡшы ир-егет" номинацияһына "кендек" Арыҫлан Ярмуллин лайыҡ булһа, иң яҡшы сығыш яһаған ҡыҙ роленә "Ҡыҙыҡ мажор"ҙан Филүзә Рәшитова билдәләнде.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Тымау тейһә



Танау тишегенә 2-шәр тамсы сөйәл үләне (чистотел) һутын тамыҙырға. Кипкән үлән булһа, эҫе һыуҙа ҡайнатып ал. Сөйәл үләне һутын эшләр өсөн был үләнде тамыры, сәскәләре менән ит турағыстан үткәрергә, ҡул менән һутын һығып алырға һәм шешәгә, банкаға һалып ҡуйлар. Көн һайын һауыттың ҡапҡасын асып, һауаһын сығаралар, әсеүҙән туҡтағас, ныҡлап ябып ҡуяһың. Был төнәтмә бәрелеп күгәргән төндә йүнәлтеү өсөн дә компресс булараҡ ҡулланыла.

### Танауҙан ҡан китеп яфалаһа...

Ҡан танауҙың уң тишегенән аҡһа, уң ҡулды өҫкә күтәрергә, ә һул танау тишеген ҡыҫырға, һәм - киреһенсә.

### Үксә шешһә...

❖ Шешкә ҡурғаш ҡағыҙ (фольга) ябырға.

❖ Иртәнсәк ашарҙан алда ауыҙҙы йыумаҫ элек шешкә һеләгәйҙе һөртөргә. Был ысул герпес һәм ирен ярылыуын да бөтөрә.

❖ Өс көн һайын кисен 3 литр ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ сәй содаһы һәм 8-10 тамсы 5 процентлы йод иретмәһе һалып, 10 минут аяҡтарҙы тығып ултырырға, аҙаҡ йомшаҡ сепрәк менән һөртөргә, ауыртҡан урынға йод һөртөргә. Иртәнсәк вазелин һөртөргә.

❖ Аҡ сәскә төнәтмәләре лә шеште бөтөрөргә ярҙам итә.

### Бөтнөк ваннаһы

Был үҙенсәлекле ваннаны тире ҡысытҡанда, аллергия булғанда ҡабул итәһең. Бының өсөн 3-4 литр һыуға 300-400 грамм бөтнөк һалып, йыуынаһың.

### Үҙәк көйөп яфалаһа...

Порошок итеп онталған 1-әр балғалаҡ имән сәтләүеген көнөнә 3 тапҡыр һөт менән ҡушып эсергә.

### Витаминлы сәй

Яҙғыһын организм витаминдарға ҡытлыҡ кисерә. Шул саҡта кипкән гөлйемеш һәм ҡурай елгән тигеҙ өлөштә алып (мәҫәлән, 1-әр ҡалаҡ), 200 мл ҡайнар һыуҙа 10 минут ҡайнатаһың, төнәтеп һөҙәһең һәм көнөнә 2-3 мәртәбә стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Унының башҡорт булыуына бер тамсы ла шигем юҡ ине - фотолағы йөҙ генә түгел, ҡылығы ла бит саф башҡортса! Башҡорттоң алсаҡлығы, мәрхәмәтлелеге, тәү күргән кешеһенә, әгәр оҡшатһа, тотош асылып барыуы!



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме туғыҙынсы дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

**Мосолман байрамдары.**

**Ҡорбан байрамы.** Зөлхизә айының унынсы көнөнән башлана.

**Ураҙа байрамы.** Рамаҙан айы аҙағында, шәүүәл айының беренсе көнөндә, ураҙа тамамланғас, билдәләнә.

**Рәжәб байрамы** рамаҙан айының егерме етенсе көнөндә билдәләнә.

**Науруз байрамы** ла билдәләнә. Науруз - яңы көн, тигән һүҙ. Марттың егерме берендә көн менән төн тигеҙләнгән саҡта билдәләнә. Науруз байрамында, башҡа байрамдарҙан айырмалы рәүештә, майҙанға иген шыттырып алып сығалар, байрамға килеүселәрҙе ҡурмас ҡыҙҙырып һыйлайҙар. Ә йыр-бейеү, музыка ҡоралдарында уйнау, сәсәнлектә ярышыу ғәҙәттәгесә бара.

## Егерме туғыҙынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Бурыс, азатлыҡ, яуаплылыҡ, хеҙмәт. Һәр кеше үҙ йәшенә ҡарап ниндәй ҙә булһа бурысын үтәргә тейеш. Әйтәйек, дүртенсе класс йәшендәгеләрҙең төп бурысы - уҡыу. Бынан тыш, үҙен тәртиптә тотоу, дәрес әҙерләү, ял итеү, тейешенсә режимлы йоҡлау, спорт менән шөғөлләнеү, өйҙә тәртиптә тотоу, өйҙәгеләргә мөмкин тиклем ярҙам итеү. Әлбиттә, һәр кеше ирекле. Был эштәрҙе лә теләһә - эшләй, теләмәһә - юҡ. Әммә һәр кешенең эске яуаплылығы, намыҫ төшөнсәһе бар. Әйтәйек, өйҙә өлкән кеше иҙән йыуып йөрөй икән - һин, дәресем күп, тигән һылтау менән, уның эшләгәнен ҡарап ултырмайһың бит. Бына шуның кеүек, кешенең эске бурысы, намыҫы алдында яуаплылығы һәр саҡ өҫтөн торорға тейеш. Һәр әҙәпле уҡыусы быны үҙе тоя.

## Егерме туғыҙынсы дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Кеше ғүмере - иң юғары әхлаҡи ҡиммәт. Кешелек донъяһы, әлбиттә, кешеләрҙән хасил, кешенең ҡул көсө менән - матди байлыҡ, ә аҡыл көсө менән - рухи байлыҡ бар ителгән. Тимәк, кеше - ул төп ҡиммәт. Тимәк, һәр кеше ғүмере - кешенең үҙе өсөн генә түгел, ул йәшәгән йәмғиәт өсөн дә иң юғары ҡиммәт. Шуға ла һәр йәмғиәт үҙ халҡының йәшәү шарттарын яҡшыртыу, сәләмәтлеген һаҡлау, уларҙың белемле булыуын хәстәрләүҙе үҙ ҡарамағына ала. Шул уҡ ваҡытта һәр кеше үҙ ғаиләһе өсөн бер ни менән сағыштырғыһыҙ ҡиммәт. Һуңғы ваҡытта ҡайһы берәүҙәр үҙ ғүмеренең ҡәҙерен аңлап етмәйенсәме, ни сәбәптәндер - үҙ сәләмәтлегенә зыян килтерерлек шөғөлдәргә өҫтөнлөк бирә: тәмәке тарта, алкоголле эсемлек ҡуллана, хатта наркотик ҡулланыусылар ҙа йышайҙы. Ундай ҡыйыҡ юлға баҫыуы еңел, ҡотолоуы ауыр. Ошоно аңлатырға, ундайҙарҙың үҙ атай-әсәйенә ни тиклем оло ҡайғы һалғанын төшөндөрөргә кәрәк уҡыусыларға. Аҙ ғына ауырлыҡты ла күтәрә алмайынса, үҙ ғүмерен аямаусылар ҙа йышайҙы. Ни тиклем оло байлыҡтың - ғүмерҙең ҡәҙерен белмәү арҡаһында оло ҡайғыға дусар итә улар туғандарын. Элек үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы хатта дөйөм зыяратта ерләтмәгәндәр. Ундайҙарҙы бик оло гонаһлы тип һанағандар. Дин бындай күренеште бөтөнләй хупламай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

КӨТӨЛМӘГӘН ХӘБӘР

# ХАЛҠЫМДЫҢ БӨЙӨКЛӨГӨН...

## ошо һалдат ҡылғаны менән үлсәр инем





**Интернет - шундай сикһеҙ океан, шул океанда ла көтмәгәндә өҫкә ҡалҡып сыҡҡан ынйыы бөртөгөнә тап булаһың.**

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына бәйле мәҡәләләр ҡарап ултырғанда ҡапыл Башҡортостан тураһында әйтелгән юлдар күҙемә ташланды. Башта өҙөгөн генә уҡыным, шунан тотош уҡып сыҡтым. Был юлдар Германияла фашизмдың тамырлана башлаған, шунан инде тернәкләнеп китеп, башҡа халыҡтарға ғына түгел, немец халҡына ла үлемесле фажиғәләр килтергән осор тураһында ул саҡта әле сабый ғына булған ҡыҙ баланың хәтирәләре аша һүрәтләнә. Башта илаһтай күреп табынған фюрерҙары алман халҡын иң юғары раса тип баһалап, башҡаларҙы бик түбән ҡуя - уларҙы үлтерергә, ҡырырға, байлығына эйә булырға мөмкин, тип лаф ора. Кеше булып өлгөрөп етмәгәндәр икән, ниңә уларҙы йәлләргә! Бына шундай шарттарҙа тәрбиәләнә йәш быуын, шуны күреп үҫеп килә Дора Насс (ҡыҙ фамилияһы - Петтин) исемле ҡыҙ. Ул хатта шул саҡтағы дәреслектәрҙе лә һаҡлаған - сабый аңына ошо идея ныҡ һеңдерелгән булған.

Блицкриг - Тиҙ еңеү килеп сыҡмай, һуғыш ипкене илгә яҡынайғандан-яҡыная. Тик фашистар һаман әле еңелерҙәренә ышанмайҙар. Ул ғына ла түгел, хатта Берлинға совет ғәскәрҙәре яҡынайып, ҡаланы бомбаға тотоу башланғас, боҫҡаҡтарҙағы халыҡҡа, имеш, баш ҡаланың бер өлөшөнән совет ғәскәрен ҡыҫырыҡлап сығара башлағандар, тигән хәбәр ишетелә. Дора менән туғандары боҫҡаҡтан сығып, шул яҡҡа йүгерә. Тик инде онтаҡҡа әйләнгән йорттарҙы ғына күрәләр. Ҡыҙҙың да йортонан нигеҙ генә ҡалған...

Улар ни эшләргә лә белмәй. Тотош уҡ емерелмәгән бер йортҡа килеп, шунда бер бүлмәне биләйҙәр ҙә, урамға сығып, сиҙәмгә ултыралар. Өмөтһөҙлөк, сараһыҙлыҡ биләп ала күңелдәрен. Шул саҡ Дора арбала ултырып килгән тәүге совет һалдатын күреп ҡала, йөрәге ярылырҙай булып тибә башлай. Егет арбанан төшә лә, яндарына килеп... саф алманса һүҙ ҡуша быларға.

"Минең өсөн тыныс тормош шулай башланды, - тип һөйләй хәҙер инде оло йәштәге фрау Дора. - Ул һалдат янибыҙға ултырҙы. Оҙаҡ һөйләштек. Ул миңә үҙ ғаиләһе тураһында һөйләне, мин уға үҙебеҙ хаҡында бәйән иттем. Икебеҙ ҙә һуғыш бөткәнгә шул тиклем шат инек. Нәфрәт тә, ҡурҡыу ҙа юҡ ине был урыҫ һалдаты алдында. Мин уға үҙ фотомды бүләк иттем, ә ул миңә - үҙенекен. Фотографияла уның фронттағы почта номеры яҙылғайны.

Өс көн ул беҙҙә, ошо емерек йорт мөйөшөндә йәшәне. Беҙ йәшәгән йортҡа ул "Танкистар урынлашҡан" тигән яҙыу элеп ҡуйҙы. Шулай итеп, ул беҙҙең торлаҡты ла, бәлки, ғүмеребеҙҙе лә һаҡлап ҡалғандыр. Уның менән осрашыуҙы мин мөғжизә тип һанайым. Шул кешелекһеҙ осорҙа ул кеше булып сыҡты!"

Был ҡыҙ тормошонда икенсе төрлө һалдаттар ҙа осраған, сумкаһын тартып алып, аяҡ аҫтына һалып тапап, бәүел итеп тә киткән берәү...

Ә баяғы изгелекле һалдатты Дора ғүмере буйы хәтерендә тота, эҙләй. Тик яуап ала алмай. Хатта власҡа Горбачев килгәс тә әле Рәсәйҙә бындай эҙләнеүҙәр алып барырға теләүсе табылмай. Тик 2010 йылда ғына бер алман журналисы эҙләнеүҙәр алып бара торғас, Борис Абудулгужин тигән был кешенең Башҡортостанда йәшәп, 1984 йылда вафат булып ҡалғанын белеүгә өлгәшә.

Башҡортостан һәм Әбделғужин тигән һүҙҙәр шунда уҡ үҙемде эҙләнеүҙәр башларға этәрҙе. Уның башҡорт булыуына бер тамсы ла шигем юҡ ине - фотолағы йөҙ генә түгел, ҡылығы ла бит саф башҡортса! Башҡорттоң алсаҡлығы, мәрхәмәтлелеге, тәү күргән кешеһенә, әгәр оҡшатһа, тотош асылып барыуы!

Фотоны теге сайтҡа ла һылтанма ҡуйып, интернеттағы сайтыма, "Борис(?) Әбделғужин. Бәлки, кемдер таныр?" тип ҡуйыуым булды, ике-өс сәғәт эсендә әллә нисә кеше яҙып та ебәрҙе: Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылынан Бәхтийәр Ғәбделәхәт улы Әбделғужин икән ул!

Ә Күгәрсен районы телевидениеһының баш редакторы Айгөл Айытҡолова интернет океанына был изгелекле кеше тураһында йәнә ентекле мәғлүмәттәр өҫтәп яҙып ҡуйҙы. Битараф түгел беҙҙең йәштәр - шул һөйөндөрҙө! Интернеттан ул ошондай мәғлүмәттәр тапҡан: 1945 йылдың 9 майында ул саҡта әле гвардия рядовойы Әбделғужин 75-се хәрәкәттәге танк ремонтлау базаһының слесарь-монтажнигы булған һәм "За боевые заслуги" тигән миҙал менән бүләкләнгән. Айгөл быны раҫлаған документтың күсермәһен дә һалған.

Фронтта 1942 йылдан, 18 йәшенән булған, тимәк, Дора менән осрашҡанда бары 21 генә булған әле егеткә. Ә фотолағы һалдат олораҡ күренә, күпте күргәне йөҙөнә сыҡҡан, әммә ниндәй тыныс, үҙ дәрәжәһен белгән һәм мәрхәмәтле, аҡыллы күҙҙәр ҡарай беҙгә йылдар төпкөлөнән. 3 йыл инде һуғыш фажиғәләрен күрә-күрә ҡан кисеп йөрөгән һалдат йөҙө. Ә бит бер генә вәхши һыҙат та юҡ, эске матурлығы ла, тышҡы матурлығы ла ҡушылған - бына бит башҡорттоң аҫылы!

Ҡыйыу ҙа, намыҫлы ла, йән аямай һуғыша ла - шул уҡ ваҡытта күңелендә иҫ китмәле мәрхәмәт! Беҙҙең халыҡҡа хас сифаттар был!

Виктор Гюго әйткәнме әле: Кешенең бөйөклөгө уның буйына бәйле булмаған кеүек, Халыҡтың бөйөклөгө лә уның һаны менән билдәләнмәй, аҡылы һәм иманы менән үлсәнә".

Мин халҡымдың бөйөклөгөн ошо ябай һалдат ҡылғандары менән үлсәр инем.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ғәжәп, минең игелекле милләттәшем тураһында мәҡәләне яҙған көнөм уның баҡыйлыҡҡа күскән көнөнә тура килгән... Әлеге лә баяғы, диуарыма Дилбәр Ғәйнизарова тигән һылыу Бәхтийәр олатайҙың улы Әкрәм ағай менән һөйләшеүе тураһында хәбәрен еткереп, уның әйткән һүҙҙәрен хатта диктофонға яҙҙыртып һалып ҡуйған. Күршеләре икән. Мин Әкрәмдең телефонын һорап алдым да, шылтыраттым.**

**Бәхтийәр ағай һуғыштан 1947 йылда ғына ҡайтып төшкән, һуғыштан һуң да тәржемәсе сифатында йәнә ике йыл Германияла хеҙмәт иткән. Ауылда МТС-та ла эшләгән, аҙаҡ төҙөлөштә бригадир булған, ауыл хужалығы биналары төҙөгәндәр. Германияла бөхтәлек-таҙалыҡҡа, көнкүреш мәҙәниәтенә бик иғтибар итеүҙәре тураһында һөйләр булған, шуға ла ауылда йорт-ҡураны, өй эсен европаса йыһазландырған.**

**- Дәфтәрҙәре әле лә һаҡлана, - тип һөйләне улы. - Иҫ китмәле каллиграфик, бөхтә һәм матур яҙмаһы хайран ҡалдыра.**

**Ғаилә ҡороп, алты ҡыҙы, бер улы донъяға килгән. Ҡыҙҙары төрлө яҡтарға таралған, үҙ ғаиләләре менән йәшәй, ә Әкрәм улы ата-бабалар төйәгенә тоғро ҡалып, ауылда йәшәй, мәктәптә хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнә. Уның инде үҙенең улы уҡып сыҡҡан, Өфөлә йәшәй, бик кешелекле һөнәр һайлаған - мал табибы. Ҡыҙы Гүзәлиә БДУ-ны тамамлай, физик һөнәрен һайлаған.**

**- Йәл, атайым Дора менән осраша алманы, хатта уның эҙләгәнен дә белмәй донъянан китте. Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, тип дөрөҫ әйткәндәр, нисәмә йылдарҙан һуң рәхмәте беҙгә килеп өлгәште. Беҙ быға шат, - тиҙәр яугирҙең яҡындары.**

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

✓ *Ям ҡыуғыны хәҙерге Учалы - Мейәс юлы буйлап Кәрим ауылы янындағы Ям ыҙмаһына килгән. Ям ыҙмаһы үҙенә күрә ҙур ғына юл сатына әүерелгән. Сөнки был ыҙманан һулға киткәне Ҡомас тауын биләп, Мейәс йылғаһы үҙәненә төшә.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Ям юлы

Ям һүҙенең мәғәнәһе төрлөсә. Мәсәлән, ағын һыу соҡорҙары теҙмәһе. Ерҙәге уйпатлыҡ, ерҙәге иңкеш ер, ерҙәге соҡор. Даруға һүҙе һөйләш теленә кереп киткән төрки-мағул һүҙе булған кеүек, дәүләт сәйәсәтендә һәм сәнәғәтендә ҡулланылған ям, ямская тигән һүҙҙәр беҙгә урыҫ теле һүҙе булып киткән кеүек. Ә ысынбарлыҡта ям - беҙҙең һүҙ, төрки халҡы теленеке.

С.И.Ожеговтың "Толковый словарь русского языка" китабында "ям" һүҙенә түбәндәге аңлатма бирелә: "На Руси до 18 века: станция на почтовом тракте, на которой менялись проводники, лошади и подводы, перевозящие государственные грузы, гонцов, послов. Ям - селение, отбывающее ямскую повинность. Держать яму. Стоять на яму с подводами. Ямская повинность. Натуральная или денежная повинность... по содержанию ямы, по поддержанию порядка на тракте. Ямская гоньба. Ямская изба. Яма - углубление в земле. Зимовальные ямы. Оборудованное углубленное место. Впадина, низина. Село, расположенное в яме. Тюрьма, арестное помещение".

Көнсығыш башҡорттарына ям хеҙмәте Яйыҡ, Исәт, Тубыл, Мейәс йылғалары буйлап ҡәлғәләр төҙөлгәндән һуң яйлап урынлаштырыла. Әле Йосоп батыр Арыҡов, Төлкөсура, Бәпәнә абыҙ күтәрелештәренә тиклем Ям юлы ла, хеҙмәте лә булмай. Һатыу итеү, көрәшеү-аралашыу, ярҙамға барыу, хәбәрләшеү Шәреҡ юлы, Ырыу юлы, һуңғараҡ Һуғыш юлы буйлап ойошторолған. Ҡыҫҡаһы, 1735 йылдарға тиклем беҙҙең төбәк башҡорто ундай юлды белмәй.

Ҡәлғә-ҡалалар менән уратып алынған Башҡортостанда почта-ям хеҙмәте ойоштороу фекерен тәүләп Татищев әле 1720 йылдан һуң Сенатта күтәрә. Ҡаҙан-Өфө, Урал тауҙары аша башҡорт ерҙәрен үтеп, Ҡурғанға барыу юлын асыу. Һәр 18-20 саҡырым һайын башҡорт ултыраҡтары аша "ямская изба"лар төҙөргә. Һәр араға үҙ аттары, арбалары менән һалдат һағы аҫтында башҡорт ямщиктарын билдәләргә. Татищев, әлбиттә, башҡорттоң боронғо гәрәпһуғыш юлын ҡулланырға уйлаған. Ләкин уның бер ваҡытта ла ул юлдан үткәне булмай. Юл көҙәйҙәр, һалйоттар, ҡыуаҡандар һәм барындар тарафынан һаҡланған. Сөнки Урал тауҙарының был биләнҙәрендә башҡорттарҙың мәгҙән ала, иретә, эшкәртә торған ҡуҙсыҡҡан-дары күп була. Һатылған ер Һатҡы ла, Златоуст та, башҡа урыҫ торағы ла булмай Уралдың был билдәшендә. Бер нисә тапҡыр тура Себергә сығыу ынтылышы булһа ла, көслө ҡаршылыҡҡа осрап, ул теләктәренән тыйылып торорға мәжбүр булалар. Шуға ла улар Төмән, Тобольск ҡәлғәләренә үҙҙәре күптән юл һалып алған Урта Урал аша, ҡәлғә-заводтары аша йөрөргә мәжбүрҙәр. Ҡәлғә-ҡалалар төҙөлгәс, улар араһындағы ныҡлы бәйләнеш булмай тороп, Көнсығыш Башҡортостанды тулыһынса буйһондороу, үҙ ҡанундарын һәм етәкселекте нығытыу мөмкин булмай.

Кириллов дәүләт, ям хеҙмәтен ойоштороуҙы Йосоп батыр күтәрелешенән алда алған булһа ла, әле был мөмкинлек урыны-урыны менән Ҡаҙан - Өфө - Ырымбур араһында ғына була. Ырымбурҙан Исәткә ям йөрөтөү әле бикәрерәк була. Булһа ла, даими түгел, ҙур һаҡ аҫтында үткәрелә. Ям хеҙмәте тик ҡағыҙ, күрһәтмәләр өсөн генә түгел, һатыу итеү, вазифалы кешеләр йөрөү өсөн дә файҙаланылған. Батырша ихтилалына тиклем Үрге Һаҡмар, Йылайыр, Ҡыҙыл, Әтәс, Магнит, Үрге Урал аша Силәбегә даими рәүештә ям хеҙмәте ойошторолә. XVIII быуат урталарына был хеҙмәт, нигеҙҙә, юлға һалына. Ям юлы тик урыҫтар килеп ултырған рудник, ҡасабалар, заводтар аша ғына үткән. Әлбиттә, беҙҙең төбәккә был хеҙмәткә Ристан юлы, Шәреҡ юлы, һуңғараҡ Һуғыш юлы һыҙмаһы аша үткән боронғо башҡорт юлы ҡулланылған. Әммә был юл һыҙлап тик 1835- 1840 йылдарҙа файҙаланыла башлай.

Беҙҙең төбәктә Ям юлы ике тармаҡлы. Ул 1870-1880 йылдарҙа барлыҡҡа килә. Әммә бер тармағы әле 1765 йылдарҙан уҡ билдәле. Был Ям юлы Үрге Урал - Уҡлы Ҡарағай - Ҡыйҙыш - Асыуҙы - Кирәбе рудниғы, Кинйәкәй - Поляковка - Ҡомас тауы бите менән Ям тауы итәгенә килгән. Әле Кирәбеләге баҡыр, алтын руднигы ныҡлап үҫешмәҫ борон Ям ҡыуғыны хәҙерге Учалы - Мейәс юлы буйлап Кәрим ауылы янындағы Ям ыҙмаһына килгән. Ям ыҙмаһы үҙенә күрә ҙур ғына юл сатына әүерелгән. Сөнки был ыҙманан һулға киткәне хәҙерге Төпәй ауылы осо менән Ҡомас тауын биләп, Мейәс йылғаһы үҙәненә төшә. Унан ары Мулдаҡай ултырағы, Убалы, Юмаш арҡыры Аратау биләне менән Ирәмәл йылғаһы кисеүенә килә. Артабан ул төньяҡҡа йүнәлеш алып, Урал һырты аша Ҡыятүр - Златоуст, артабан Уралдағы заводтар аша Екатеринбургҡа сыға. Ям юлының икенсе тармағы Мейәс, Сыбаркүл ҡалаларына барып туҡтай. Ә Өстамаҡ (Троицк), Ҡурған йүнәлешендәге казак станицалары Филимон, боронғо Күнгерәү (Кундравы) аша Варламово, әле лә йәшәп ятҡан Ям исемле башҡорт ауылы аша Силәбегә, Ҡурғанға, Себергә йүнәлеш ала. Билдәле булыуынса, Ям ыҙмаһында почта комиссары булып Мәндей Төпәев тигән кеше тора. Ул ваҡытта әле Кәрим ауылы булмай. Ҡостанай һәм Төпәй ултыраҡтары ғына була. Кәрим ауылы ул саҡта хәҙерге Ленинск приискыһы арьяғындағы Ҡыуалды тауы итәгендә булып, 1828 йылда Тау һәм тоҙ департаментының ҡарары буйынса хәҙерге урындарына күсерелә. Әйтергә кәрәк, төпәйҙәрҙең бер өлөшө барындар Тубыл яғынан күсеп ултырған осорҙан ҡалған була.

Ул ерҙә барындар, бүләктәр, мәсәлимдәр йәшәгән. Төпәйҙәр бүләктәрҙең ризалығы менән ҡалған да инде. Ә бүләктәр - барындарҙың шәжәрәһенә кергән көслө бер зат тармағы. Барын-табындарҙың бер күренеклеһе Мәндей почта комиссары дәрәжәһендә хеҙмәт итә. Шул Мәндей Төпәев ауылды ревизиялар барған осорҙа үҙ исеменә яҙҙыра ла инде.

Ҡомас тауы үҫеренән бөгөн дә Мәндей шишмәһе сылтырап ағып ята. Мәндейҙең йорто Мәндей түбәһенең ҡибла яғынан, шишмәнән алыҫ та түгел ерҙә ултырған. Почта-ям сапҡан ямщиктарға Мәндей апрелдән сентябргә тиклем һәр сағырым өсөн ярты тин генә аҡса түләгән. Ашау-эсеүҙән тыш, ям йортонда йоҡлап сығыу хаҡы бер тин була. Шул ваҡиғаларға шаһит булып, Ям юлы сатында Ям тауы һаман да тора. Теләһәгеҙ, уны Ҡостанай - Кәрим ауылына етер саҡта абайларһығыҙ.

Ҡара табындарҙың бер өлөшө Солтан хакимы, Ҡалҡаман батыры менән Тәнребирҙе шишмәһендәге килешеү буйынса Барын ырыуы менән тиләүҙәр араһына кереп ултыра. Шул осорҙа бергә килә алмай ҡалған өлөшө хәҙерге Верхний Уфалей, Нижний Уфалей, Ҡариҙел йылғаһы башындағы Юрмә тауы буйында, Ҡарабаш ултырағында йәшәгән. Урыҫ хакимиәте ҡәлғә-ҡалалар төҙөп, көньяҡтан ҡыҫырыҡлағас, улар көньяҡҡа, Барын ырыуы ерҙәренә килешеү менән күсенә һәм хәҙерге Ленинск ҡасабаһының төньяғына, Ҡауынды тауы буйына ултыра. Әммә 1828 йылғы указ менән ул ерҙәренән дә хәҙерге йәшәгән ерҙәренә күсеп килергә мәжбүр булалар. Ҡауынды тауы шунан һуң Ҡыуылды тип атала башлай. Ҡауынды ере барындарҙыҡы булыу сәбәпле, улар Көсөк батыр нәҫелдәренә яһаҡ түләп торған. Кәрим ауылы халҡының боронғо ҡушаматы - Ҡарабаш. Ҡарабаш - кәримдәр ере!

Тамырҙары Ҡара Табын һәм Ҡыуаҡандар булған кәримдәр ер хужалары булған барындарҙан, бүләктәрҙән, мәсәлимдәрҙән, йомабайҙарҙан һорап, уртаға кереп урынлашҡан. Холоҡтары, кеше менән мөғәләмәләрендә айырмалары әле лә һиҙелгән кеүек. Минеңсә, йәшелбайҙар, ҡарабайҙар, ҡыҙылбайҙар, ҡыҙыргәлиҙәр шул төркөмгә ингән. Әммә быуат тулҡындары барыһын да йыуа. Хәҙер халыҡтар аралашып, берләшеп, бер ҡан булып бөткән. Улар барындар араһында ирегән тиһәк, дөрөҫ булыр. Хәйер, кем тип иҫәпләһәләр ҙә, бөгөн халыҡ үҙе хаҡлы. Һәр халыҡ хәҡиҡәтле, һәр халыҡтың үҙ хоҡуғы үҙ ҡулында. Кем булһаҡ та, беҙ бергәбеҙ. Был тик тарих ҡына.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 5-9,11-се**
**һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙың көнкүрешендә йәнлек аулауҙан ҡала әһәмиәтле урында ҡошсолоҡ торған. Ҡош аулауға хоҡуҡ шулай уҡ XVII-XVIII быуаттарҙың документтарында телгә алына. Әгәр йәнлектәргә һунар сауҙа-тауар мөнәсәбәттәре маҡсатында алып барылһа, ҡош аулау нигеҙҙә шәхси ҡулланыуҙы ҡуҙаллаған. Башҡорттар ҡорға, һуйырға, селгә, агунаға, ҡыр ҡаҙҙарына һәм аҡҡоштарға һунар иткән. Ҡыр ҡаҙҙарының һәм ҡыр өйрәктәренең, төрлө сарлаҡтарҙың йоморҡаларын йыйыуҙы мин күпләп Урал арьяғы күлдәрендә генә күҙәтә алдым. Башҡортостандың башҡа райондарында был эш менән бары тик балалар ғына шөғөлләнә ине.

Урманлы райондарҙа һуйырға һунар үҙенең ябайлығы менән айырылып тора. Көҙгөһөн, имән сәтләүеге ҡойолғас, имән урманлардарында һуйырҙар бер урынға күпләп йыйыла. Тәүге ҡар төшөү менән башҡорттар төнөн һуйырҙарҙың йоҡлаған сағында уларҙы аулай ине. Һунарсыларҙың береһе оҙон күсәк менән ҡоралана, икенсеһе ҡайын йәки ылыҫлы сыраларҙан сыраҡ яндырып, уларҙы тотоп йөрөй. Сыраҡ яҡтыһында ҡар өҫтөндә йоҡлап ятыусы һуйырҙар әллә ҡайҙан күренә. Улар ҡаты йоҡлай һәм был һунарсыға уларға яҡын килеп, күсәк менән һуғып алыу мөмкинлеген бирә. Ҡайһы бер урындарҙа уларҙы оҙон һайғауҙарға беркетелгән һөҙгөс ярҙамында аулайҙар. Һуйырҙарға һунар ҡыҫҡа ғына ваҡыт барһа ла, табыш күп була: ике һунарсы төн эсендә тиҫтәләгән һуйыр алып ҡайтҡан. Шундай уҡ ысул менән ҡорға һунар иткәндәр.

Ҡоштарҙы тоҙаҡ менән аулау киң тарала. Улар түбәндәгесә эшләнә: һалабаш ебенә 2-3 метр оҙонлокта бер үк алыҫлыҡта 9-ҙан 16-ға тиклем ат ялынан үрелгән элмәк яһала. Бындай элмәктәр ярҙамында ҡорҙарҙы уларҙың яҙғы уйыны ваҡытында тоталар. Уйын урынында төрлө урындарҙа ағас араларында һәм ергә ҡағылған ҡаҙыҡтар араһында ерҙән 20 сантиметр бейеклектә урынлаштырыла һәм уйын ваҡытында уларға бик күп ҡош эләгә.

Башҡорттар, ҡорҙарҙан тыш, шундай уҡ элмәктәр менән ҡамыш араһында өйрәктәрҙе, ҡоштар йөрөгән һуҡмаҡтарға, имән урмандарына ҡуйып, һуйырҙарҙы аулағандар. Әгәр тотолған ҡош һатыуға тәғәйенләнгән икән, элмәк ҡыҫылып, ҡоштоң башы һығылған; әгәр шәхсән ҡулланыу өсөн тотолһа, һунарсы килгәнгә тиклем уның тере ҡалыуы шарт булған. Сөнки башҡорттарға һуйылмаған ҡош итен ҡулланыу харам һаналған. Шуға күрә, ҡош элмәккә эләккәс, унан сығам тип муйыны һығылмаһын өсөн, элмәктә махсус төйөндәр эшләнгән һәм улар билдәле бер ҡулса барлыҡҡа килтергән, ҡоштоң муйынын ныҡ һыҡмаған.

Һоро ағуна һәм ҡор аулау өсөн япма йәки әүен ҡулланғандар. Баҫыуҙарҙа, эскерттәр һәм иген һоҫландары эргәһендә конус формаһында нигеҙен өскә ҡаратып ҡаҙыҡтар ултырталар. Япма әүендән бары тик икенсеһенең уртаһына ҡаҙыҡ ҡағылыу менән генә айырылған. Тоҙаҡ өҫтөнә ҡунаҡла эшләнелә, уға иген башаҡтары йәки балан емештәре ҡуйыла. Ҡайһы берҙә аҙыҡтарҙы әүендең уртаһындағы ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуялар.

✓ *Үҙеңдең милләтеңде һөйөп, башҡаларҙы хөрмәт итеү милләтселек түгел ул. Милләтселек сит милләтте кәмһеткән ерҙә башлана. Сөнки был осраҡта һин Аллаһтың бүләге өҫтөнән көлгән булаһың.*



**"Үҙеңдең аңыңды һис юғы бер сәғәткә сит уйҙарҙан азат тота алыу - бөйөк ғәмәл", тигән Йәмилитдин әл-Ҡазикумухи. Хәҙерге заманда был һүҙҙәр бигерәк актуаль, сөнки әҙәм балаһы тәүлек әйләнәһенә мәғлүмәт- цунами уртаһында йәшәй. Ул мәғлүмәт тулҡындары килтергән йоғонтонан, сит уйҙан азат булыу ҙа мөмкин түгелдер. Фәҡәт тик кешелек барлыҡҡа килгәндән алып иң ҙур йоғонтоло тип табылған диндә, Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуҙа ғына әҙәм балаһы был цунами афәтенән азат була алалыр, тип уйланыла. Ана шундай бер сәғәтлек рух, фекер, күңел азатлығын безгә дин уҡытыусылары Тулҡын хәҙрәт КӘРИМБЕРДИЕВ менән Нурмөхәммәт хәҙрәт НУРИЕВ бүләк итә.**

**Шәреҡте өйрәнеүсе рус ғалимы В.В. Бартольд тарафынан "үҙ халҡының рухи короле" тип аталған шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тыуыуына быйыл 180 йыл тула. Әйтергә кәрәк, совет дәүерендә исеме онотторооға дусар ителгән был шәхесте халҡыбыҙ үҙ йөрәгендә һаҡланы һәм йылдар үткән һайын был шәхес эшмәкәрлегенең әһәмиәте арта ғына барасаҡ. Хаҡлы рәүештә "Рәсәй федерализмы атаһы" тип йөрөтөлгән Әхмәтзәки Вәлиди ҙә,**

та беҙ ошо изге йәндәребеҙҙең нәсихәттәренә ҡолаҡ һалһаҡ, ҡотолоу юлыбыҙ ҙа шунда буласаҡ. Зәйнулла ишан тормошон, уның эшмәкәрлеген өйрәнеү беҙҙән ингә һалынған изге бурыс. Бөгөн беҙ халҡыбыҙҙы телебеҙҙе, рухыбыҙҙы, иманыбыҙҙы һаҡларға саҡырабыҙ икән, тимәк, уға Зәйнулла ишан тормошон да өлгө итеп ҡуйырға тейешбеҙ.

**Тулҡын хәҙрәт:** Аллаһу Тәғәлә Ҡөрьән-Кәримдә ғилем әһеле дәрәжәһенең башкаларҙан өҫтөн булыуы хаҡында: көслө була. Шуға ла йәштәрҙәң, аңын-тоңон белмәҫтән, икенсе йүнәлешкә, беҙҙең диндә, мәҫәлән, ваһабислыҡ юлына төшөп китеүе мөмкин. Был да мәғлүмәтһеҙлектән килә. Зәйнулла ишан Рәсүлевтың ваһабиттарға, салафиттарға ҡаршы яҙылған ғәрәп теләндәге китабы бар. Ишан буласаҡ ваҡиғаларҙы алдан күреп, белеп, үҙенең милләте балалары аҙашып китмәһен өсөн ошо китапты яҙып ҡалдырған. Ҡасандыр шәреҡтә күҙәтелгән был күренештәр

туған телен, милләтен дә хөрмәт итергә бурыслы. Милләт - Аллаһ биргән бүләк ул. Шуға күрә беҙ был бүләкте ҡабул итеп, уға шөкөр итергә тейешбеҙ. "Минең шөкөр итеүсе бәндәләрем аҙ", тиелә Ҡөрьәндә. Әйтәйек, һинең атай-әсәйеңдең милләте бар, уның теле, тарихы, мәҙәниәте бар - былар барыһы ла Аллаһу Тәғәләнең был донъяла һиңә биргән ниғмәте ул. Ә уның шөкранаһы - шул милләтеңде һөйөү. Ошо күҙлектән ҡарағанда, дин юлына баҫҡан кеше, киреһенсә, үҙенең милләтенә нығыраҡ хеҙмәт итергә тейеш.

Ә өйләнеүгә килгәндә, һәр кеше Әҙәм менән Һауаның балаһы, ләкин балаларының киләсәген уйлаған кеше үҙ милләтенең вәкиленә өйләнеүҙе йә кейәүгә сығыуҙы ҡулай, яҡшыраҡ күрәсәк. Сөнки ике милләт ҡанынан яралған бала, лаҫлыҡ, атай-әсәйенә, ике яҡтың да туған-тыумасаларына хөрмәт мәсьәләләре ниндәй нигеҙгә таянып һуң? Әлбиттә, башҡа милләт вәкилдәренә өйләнеү, кейәүгә сығыу шәриғәткә ҡаршы килмәй. Әммә үҙеңдеке яҡыныраҡ, файҙалыраҡ, тәмлерәк була инде ул. Үҙеңдекенә бер нәмә лә етмәй. Юҡҡа ғына "Ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй" тимәйҙәр бит.

Әлбиттә, милләтте - диндән, динде милләттән айырып булмай. Беҙҙә элек-электән дини йолалар милли йолалар менән бергә үрелеп, бер-береһен тулыландырып торған. Әгәр ҙә ниндәйҙер ҡаршылыҡ йә аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуһа, халҡыбыҙҙа быны урынеренә еткереп аңлатырлыҡ дин әһелдәребеҙ булған. Беҙгә милләтебеҙҙең дин менән бәйле йола-традициялары мәсь-

# ТУҒАН ТЕЛЕНДӘ

## милләтең алдындағы

**ошо шәхестең йоғонтоһо булмаһа, үҙенең приказчиктар сафын ғына тулыландырыу ихтималлығы хаҡында белдергән. Был да шулай уҡ Зәйнулла ишанға оло баһа. Шуға күрә Зәйнулла ишан Рәсүлев эшмәкәрлегенең әһәмиәте бөгөн дә актуаль. Был бигерәк тә власть вертикале үткәрелгән Рәсәйҙә федерализмды һаҡлап ҡалыу мәсьәләһенә ҡағыла. Ошо күҙлектән сығып, һеҙ Зәйнулла ишан эшмәкәрлегенең әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡалдырған тәриҡәт юлын дауам итеүсе Зәйнулла ишан хәҙрәттәре үҙ заманында милләтебеҙҙе етәкләүсе заттан була. Был бер ҙә сер түгел, сөнки беҙҙең милләтебеҙгә хас булған тәриҡәт юлында һәр бер ырыу башлығы янында бер ишандың, рухи етәксенең булыуы беҙгә мәғлүм. Зәйнулла ишан Рәсүлевҡа килгәндә, уның хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр асылһа ла, уны өйрәнергә лә өйрәнергә әле. Сөнки беҙгә йыш ҡына сит ил, сит төбәк кешеләре килеп, һеҙҙең ырыуҙа шундай-шундай ғалим кешеләр, дин әһелдәре булған, тип әйтеүҙәрен ишетергә, шуны үҙебеҙ белмәгәнгә йөҙҙө ҡыҙартырға тура килә. Беҙ үҙебеҙҙең бөйөк шәхестәр тураһында, асылда, башҡа ҡәүем кешеләре, бигерәк тә урыҫ ғалимдары яҙмаларынан сығып ҡына беләбеҙ.

Зәйнулла ишан бер йыйыл эсендә ете мең кешене тәриҡәттә тәрбиәләгән. Милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың хәҙерге ваҡытта сағыштырмаса тыныслыҡта йәшәүе Зәйнулла ишан мөриттәре эшмәкәрлеге, шулай уҡ дин әһелдәренең доғалары менән дә аңлатыла. Заман фетнәһендә, йәғни ахырызаман бәләһе килгән ваҡыт-



безгә килеп етә торған булһа, йәштәргә ошо китаптарҙы уҡытып, был йоғонтоларҙан ҡотҡарыу сараһын алдан күргән ишан.

**Элек дини рух менән милли рух бер бөтөн булған. Вәлиди ҙә, Бабич та, Аҡмулла ла, Ғафури ҙа, Туҡай ҙа - барыһы ла мәҙрәсәләрҙә белем алған. Хәҙерге ваҡытта иһә, милли рух менән дини рух икегә айырылған һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта**

ҡайһы яҡҡа барырға белмәйенсә, ике урталыҡта тороп ҡала. Атаһы милләтен һайлар ине, әсәһен дә ярата, әсәһенекен һайлар ине, атай ҡаны тарта. Былай кешене бәхетле тип әйтеп буламы икән?

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Хәҙрәттең һүҙен ҡеүәтләп әйткән ваҡытта, был проблемалар, әлбиттә, наҙанлыҡтан килеп сығалыр, тим. Кемдер бер ниндәй ҙә дини белеме булмайынса намаҙға баҫа бөгөн, Ҡөрьән-Кәримде бер ҡат уҡ-

әләләрен ныҡлап өйрәнергә кәрәк.

**Тулҡын хәҙрәт:** Аллаһы Тәғәлә барса кешеләрҙе бер Әҙәмдән һәм бер Һауанан яралтҡан һәм кешеләр бер-береһен танышын, өйрәнһен өсөн уларҙы төрлө милләттәргә бүлгән. Әйтергә кәрәк, быныҙ менән Ул кешелекте бер тәрләнлөктән ҡотҡарған, тимәк, кешеләрҙең күңелен байытыу маҡсатында милләттәрҙе бар иткән. Ысынлап та, тормош үҙенә ниндәйҙер яңылыҡты асыу менән гүзәл. Тимәк, милләттәрҙең донъяла йәшәүе тормоштоң йәме өсөн кәрәк. Үҙеңдең милләтеңде һөйөп, башҡаларҙы хөрмәт итеү милләтселек түгел ул. Милләтселек сит милләтте кәмһеткән ерҙә башлана. Сөнки был осраҡта һин Аллаһтың бүләге өҫтөнән көлгән булаһың. Икенсе милләтте кәмһеткән кеше ул Аллаһтың ихтыярынан көлөүсе. Сөнки бер кем дә үҙенең ихтыяры менән ниндәйҙер милләттең вәкиле булып китмәй, былар барыһы ла Хоҙайҙың ихтыяр-көҙрәте менән барлыҡҡа килә. Икенсе милләтте кәмһеткән, унан көлгән кеше - ул Аллаһтан көлгән кеше ул. Быны имамдар үҙҙәренең шәкерттәренә бик ҡаты итеп әйтергә һәм иҫкәртергә бурыслы. Был йәһәттән, ҡайҙалыр проблема барлыҡҡа килә икән, уның сәбәбен ғилемдә, мәғрифәттә эҙләргә кәрәк. Әгәр ҙә ғалимдар аҙ булһа йә булмаһа, ул урынды һәр ваҡыт ялған ғалимдар яулап алыусан.

**Стәрлегән бер ир-егет бик борсолоп шылтыратҡайны. Ул дәрәжәле генә бер милләттәштән: "Ниңә туған телегеҙҙә һөйләшмәйһегеҙ?" - тип**

***Халыҡҡа абруйлы кешеләрҙең өлгөһө кәрәк, ундай шәхестәрҙе тарихтан табып була һәм уларҙы халыҡҡа күрһәтергә кәрәк. Күп кенә дин юлында йөрөгән йәштәр үҙҙәренең тарихын, шәхестәрен, ғалимдарын белмәй. Ә кемдеңдер өлгөһөнә эйәреү ихтыяжы һәр кемдә, бигерәк тә йәш кешелә көслө була. Шуға ла йәштәрҙең, аңын-тоңон белмәҫтән, икенсе йүнәлешкә, беҙҙең диндә, мәҫәлән, ваһабислыҡ юлына төшөп китеүе мөмкин. Был да мәғлүмәтһеҙлектән килә. Зәйнулла ишан Рәсүлевтың ваһабиттарға, салафиттарға ҡаршы яҙылған ғәрәп теләндәге китабы бар. Ишан буласаҡ ваҡиғаларҙы алдан күреп, белеп, үҙенең милләте балалары аҙашып китмәһен өсөн ошо китапты яҙып ҡалдырған. Ҡасандыр шәреҡтә күҙәтелгән был күренештәр беҙгә килеп етә торған булһа, йәштәргә ошо китаптарҙы уҡытып, был йоғонтоларҙан ҡотҡарыу сараһын алдан күргән ишан.***

"Ғилем әһеле менән ғилемһеҙҙәр тиң булмайҙар", - ти. Зәйнулла ишан Рәсүлев бик көслө ғалим булған, ә халыҡ һәр ваҡыт ғилем эйәләре артынан эйәргән. Ул үҙ милләте мәнфәғәтен ҡайғыртҡан, шуға күрә уға эйәргәндәр.

Халыҡҡа абруйлы кешеләрҙең өлгөһө кәрәк, ундай шәхестәрҙе тарихтан табып була һәм уларҙы халыҡҡа күрһәтергә кәрәк. Күп кенә дин юлында йөрөгән йәштәр үҙҙәренең тарихын, шәхестәрен, ғалимдарын белмәй. Ә кемдеңдер өлгөһөнә эйәреү ихтыяжы һәр кемдә, бигерәк тә йәш кешелә

**бөгөн дин юлына баҫҡан күптәр милләтенең мәнфәғәтен ситкәрәк ҡуйып йәшәй башлай. Ундайҙар өсөн ниндәй милләт ҡыҙына өйләнеү, ниндәй милләт улына кейәүгә сығыу ҙа мөһим түгел, бары тик мосолман булһын, йәнәһе. Дин күҙлегенән быға ниндәй аңлатма бирергә мөмкин булыр ине?**

**Тулҡын хәҙрәт:** Ватанды һөйөү иләндә, шунда йәшәгән милләтеңде лә һөйөү ул һәм был имандың бер өлөшө икәнлеге хаҡында белдерә Мөхәммәт бәйғәмбәр. Һәр кем дин тотоу менән бергә үҙенең

ып та сыҡмаҫтан, үҙен ниндәйҙер сикләүҙәргә дусар итә башлай. Шундайҙар араһында үҙ милләтенә ҡарата күҙе тонғандар һәм, кемгә өйләнһәм дә, кейәүгә сыҡһам да ярай, мосолман булһа - еткән, тип иҫәпләүселәр барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә һин үҙеңдең телеңде, милләтеңдең тарихын, мәҙәниәтен яҡшы өйрәнмәйенсә тороп, икенсе милләт вәкиле менән ғаилә ҡорһаң, был хәл һинең менән ғаилә ҡорған яртыңдың да һинең кеүек уҡ наҙан булыуы хаҡында һөйләй. Әлбиттә, былай ғаилә ағзалары намаҙға ла баҫыр, әммә тәҡүәлек, иман ныҡлығы, их-

✔ *Кеше йөрәкһеҙ йәшәй алмаған кеүек, туған телһеҙ ҙә йәшәй алмай. Әгәр ҙә кеше үҙ балаһына туған телен, халҡының тарихын, мәҙәниәтен өйрәтеп ҡалдырмай икән, ул кешенең һәм уның балаларының киләсәге юҡ.*

# БЕЛМӘҮ – хыянат ул

**һораған һәм шундай яуап ишетеп, аптырауға ҡалған: "Минең бик шәп сит ил маркалы машинам, үҙемдең бизнесым, аҡсам бар. Әммә туған телемде белмәүем менән генә үҙемде бәхетһеҙ тойорға тейешменме? Ана, ултыра бер асарбаҡ, уның миндәге байлыҡтың береһе лә юҡ, уның ҡарауы, ул башҡортса яҡшы белә, ул һуң бәхетлеме?" Ошо ике кешенең ҡайһыһы бәхетле тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Бәйғәмбәрҙең матур бер хәҙисе хәтерҙә ҡалған: "Бәндәләргә рәхмәтле булған әҙәм Аллаһы Тәғәләгә лә рәхмәтле". Бәхет рәхмәтле булыуҙан, аҙ ғынаға ла ҡәнәғәт булып,шөкөр итә белеүҙән башлана. Диндең төп нигеҙе -Аллаһҡа ышанған кешенең әҙәпле булыуында. Ә әҙәпле булыу иң беренсе сиратта атай-әсәйеңә рәхмәтле булыу. Ә инде һин туған телеңде белмәһәң, нисек итеп атай-әсәйеңә рәхмәтле була алаһың? Динде, милләтте, телде бер-береһенән айырып ҡарап булмай. Кеше хатта аяҡһыҙ ҙа көйө иманлы булып, намаҙ уҡып йәшәргә мөмкин, әммә кеше йөрәкһеҙ йәшәй алмаған кеүек, туған телһеҙ ҙә йәшәй алмай. Әгәр ҙә кеше үҙ балаһына туған телен, халҡының тарихын, мәҙәниәтен өйрәтеп ҡалдырмай икән, ул кешенең һәм уның балаларының киләсәге юҡ. Телеңде белеү - ул атай-әсәйеңде хөрмәт итеү, ә әсәһен хөрмәт итмәгән кешенең киләсәге бармы икән? Ул бәхетлеме икән? "Атай-әсәйенең фатихаһын алып ҡала алмаған кешенең ғүмере бушҡа үткән", тиелә бер хәҙистә. Бында уйланырға урын бар.

**Тулҡын хәҙрәт:** Башта кеше үҙенә шуны асыҡларға тейеш: нимә ул бәхет? Машинаң, аҡсаң, бизнесың булыу бәхетме ни ул? Улар бөгөн бар, иртәгә - юҡ. Бәхет - бик киң мәғәнәле һүҙ. Туған телеңде белеү - бәхетле булыуҙың бер шарты. Сөнки рухи байлыҡ менән матди байлыҡты сағыштырып булмай. Теге асарбаҡ кеше үҙенең туған телен белеүе менән машинаһы, аҡсаһы, бизнесы булған кешегә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк. Сөнки унда бер ниндәй ҙә аҡсаға һатып алып булмай торған тел байлығы бар. Телен белеүсе кеше асарбаҡ булһа ла, туған телен белеүе менән үҙенең милләте алдындағы бурысын үтәгән. Туған телен белмәгән кеше үҙенең милләте алдында хыянатсы ла, сөнки ул туған телен белмәүе менән милләтенең юҡҡа сығыуына булышлыҡ итә. Телеңде онотоу, белмәү, өйрәнергә теләмәү һәм шул уҡ ваҡытта бының менән маҡтаныу - ҙур хыянат. Был - ҙур бәхетһеҙлек. Был кешегә ҡиәмәт көнөндә яуап тоторға ла кәрәк бит әле. Ҡиәмәт көнөндә туған телен белгән теге асарбаҡ телен белмәгәндән өҫтөнөрәк буласаҡ. Шуға күрә, матди байлығына ҡарап ҡына үҙен бәхетле тойоусы был кеше бик тар ҡарашлы бәхетһеҙ бер әҙәм ул.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Заман күҙлегенән ҡараған ваҡытта, бөгөн үҙеңдең туған телеңде генә түгел, башҡа бер нисә телде лә белеү кәрәк. Элек-электән төрки телле ғалимдар ғәрәп, төрөк, фарсы, урыҫ телдәрен яҡшы белгән. Бөгөн хатта үҙенең туған телен белмәгән кеше ғалим булып маташа. Үҙеңдең туған телеңде белмәйенсә тороп, сит телдәрҙе өйрәнергә тырышыуҙы нисек аңларға? Үҙенең туған телен белмәгән кеше башҡа телдәрҙе белеүе йә булмаһа ниндәйҙер матди байлыҡҡа эйә булыуы менән ғорурлана аламы икән?

**▸ Совет осоронда бик матур бер күренеш бар ине. Ул да булһа - кешеләрҙең һәм халыҡтарҙың бер-береһенә ҡарата иптәштәрсә мөнәсәбәте. Шул уҡ ваҡытта күп кеше дин тотмай, намаҙ уҡымай ине. Совет власы юҡҡа сыҡты, шул кешеләр мәсеттәргә һәм сиркәүҙәргә барып ғибәҙәт ҡыла башланы. Уның ҡарауы, теге иптәштәрсә мөнәсәбәт тә юҡҡа сыҡты. Тимәк, Аллаһы Тәғәләнең кешеләрҙе татыулыҡҡа өндәй торған ҡанундары, совет осоронда башҡаса мөмкинлек булмағанлыҡтан, иптәштәрсә мөнәсәбәт булып йәшеренеп йәшәгән. Бында шулай тип уйларға урын бармы?**

**Тулҡын хәҙрәт:** Урын бар. Совет осороноң яҡшы яҡтары ла күп булды. Быны инҡар итеп булмай. Коммунизмды алға һөрөүселәрҙең идеяларының төп нигеҙен диндән алғаны ла билдәле бит. Уларҙың иң ҙур хатаһы - шундай йәмғиәтте Аллаһы Тәғәләнең үҙен инҡар итеп төҙөргә маташыуҙа. Милләттәр араһында тигеҙлек, татыулыҡ урынлаштырыу идеяһын да улар дин тәғлиМәтенән алған. Милләтселектең килеп сығыуы дин менән бәйле түгел. Быны дәүләтте тарҡатыу маҡсатын алға һөргән сәйәсмәндәр уйлап сығарҙы. Тап шул саҡта милләтселек уты яндырылды, ул ут һаман да яныуын дауам итә. Шуға күрә кешеләр һәм халыҡтар араһындағы татыулыҡтың юҡҡа сығыуы дингә килеүҙән түгел. Динде яҡшы белгән кеше үҙ милләтен һөйә, әммә башҡаларҙы ла кәмһетмәй. Әле Нурмөхәммәт туған әйткәнсә, элек ғалимдар башҡа милләттәргә ҡарата хөрмәтен белдереп, биш-алты тел белгән. Башҡа телде өйрәнеү - ул шул телдә һөйләшкән милләттән яҡшы нәмәләрҙе үҙләштереү, тигән һүҙ. "Хикмәт мосолмандың юғалтҡан әйбере ул", тиелә Ҡөрьәндә. Ғалимни тиклем күберәк телдәр белгән һайын, шул телдәр аша башҡа халыҡтарҙың күңелендәге хикмәтте тиҙерәк һәм күберәк таба, аңына һеңдерә. Башҡа телдәрҙе белеүсе ғалим үҙ милләтен башҡа милләттәрҙә булған хикмәттәр, гүзәллектәр менән байытыусы кеше.



**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** Совет осоронда халыҡ динһеҙ булһа ла, уның киләсәккә ниндәйҙер өмөтө, кешелеклелек, хөрмәт бар ине. Үҙгәртеп ҡороу осоронда халыҡ шул өмөтөн юғалтты. Ихласлыҡты ла ислам динендә булған кешеләр генә һаҡлап алып ҡалды, тиер инем. Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә, мәҫәлән, күпселек элек ундағы завод-фабрикаларҙы төҙөгән әбей-бабайҙар көн күрә. Улар илебеҙ тормошоноң яҡты киләсәгенә ихлас ышанып, тәүлек әйләнәһенә аслы-туҡлы тир түккән. Совет дәүере үтеп китте, улар төҙөгән завод-фабрикалар шәхси ҡулдарға күсеп бөттө. Улар аҙ ғына пенсия менән биш ҡатлы хрущевкаларҙа йә бараҡтарҙа тороп ҡалды. Улар ни динде өйрәнә алманы, ни балаларына тейешле тәрбиә бирә алманы. Уларға бөтә донъя бөгөн дошман булып күренә. Улар өсөн иң ҙур йыуаныс хәҙер шешә төбөндә. Улар хәҙер бер кемгә лә ышанмай. Дәүләткә лә, дингә лә, кешегә лә. Ә кемдәр мәсеткә килеп, дин юлынан китте, улар барыһын да ғәфү итте һәм уларҙың йөҙөнә нур, тормошона ҡот ҡунды.

Шулай итеп, совет дәүере бар халыҡтар өсөн дә ҙур һынау булды. Барыһы ла был һынауҙы үтеп сыға алманы. Беҙҙең милләт был һынауҙы уңышлы үтте, тиергә мөмкин. Сөнки күптәребеҙҙең ата-олаталары именлегебеҙ һәм ҡотобоҙ өсөн ниәт ҡылып, доғалар уҡып ҡалдырған. Беҙҙе ана шул доғалар һаҡлай ҙа инде. Был күренештәргә ҡарап, беҙ дөрөҫ һығымталар яһарға бурыслыбыҙ. Яҡындарыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы, милләттәштәребеҙҙе иманға өндәү - беҙҙең изге вә мөҡәддәс бурыс. Бар кешене лә бысраҡтан, батҡаҡтан һөйрәп сығарыу мөмкин дә түгел. Ә йөрәге асыҡ кешегә Аллаһы Тәғәлә үҙе юл күрһәтә.

**▸ Хәҙерге ваҡытта күп кенә ғалимдарҙың ғилеме диндән айырылған. Был дөрөҫмө?**

**Тулҡын хәҙрәт:** Был дөрөҫ түгел. Сөнки бөтә ғилем диндең бер өлөшө булғас, уны нисек диндән айыраһың инде? "Аллаһ бөтөн әйберҙәрҙе кешеләр ошо нәмәләр аша Аллаһҡа килһен өсөн яралтҡан", ти Әбүбәкер Ситдыҡ. Шуға күрә, элекке ғалимдарҙың 90 проценты иманлы, динле, шул уҡ ваҡытта донъяуи белемле булған. Зәйнулла ишан шулар иҫәбендә.

**▸ Тулҡын хәҙрәт, Һеҙ милләтегеҙ менән үзбәк кешеһе, Башҡортостанда йәшәү, башҡорт телендә һөйләшеү Һеҙгә нимә бирә?**

**Тулҡын хәҙрәт:** Ошо ерҙә йәшәүсе төп халыҡтың телен белеү миңә иң беренсе нәүбәттә башҡорт халҡының күңелен аңларға, тарихын өйрәнергә ярҙам итә. Икенсенән, һәр кеше үҫергә, камиллашырға тейеш. Халыҡтың телен, мәҙәниәтен өйрәнеп кенә шул халыҡ менән бергә үҫешеү мөмкин. Бында башҡа төрлө үҫеште күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Әйтәйек, ергә өс-дүрт төрлө үҫентене ултыртһаң, ямғыр уларҙың барыһы өсөн дә яуа. Тап шуның кеүек. Белгәнеңде кемгәләр өйрәтер өсөн дә тел белеү кәрәк. Бер хәҙистә хатта "Бер ҡәүемдең телен белгән мөьмин ул ҡәүемдең мәкеренән дә имен була", тип әйтелә.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт:** "Әл-Әхзәб" сүрәһенең 5-се аятында бер кешене икенсе кешенең атаһының исеме менән әйтергә бирәүҙең дә хаҡы булмауы хаҡында әйтелә. Әгәр ҙә Әхмәт Мөхәммәттең улы икән, ул Мөхәммәттең улы булып ҡалырға тейеш. Әгәр ҙә уны атаһы түгел, икенсе берәү тәрбиәләне икән - яҡшы, әммә ул үҙенең ҡан атаһының исеме менән аталып йөрөтөлөргә тейеш. Әгәр ҙә ул башҡа атаның исеме менән аталып йөрөтөлһә, был осраҡта ҙур яза бирелеүе тураһында ла әйтелә был сүрә аяттарында. Шулай уҡ кемдер үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, үҙен кемдеңдер улы йә ҡыҙы, ниндәйҙер икенсе милләттең вәкиле итеп күрһәтһә, халыҡҡа белгертһә, ул кеше лә Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ҙур яуызлыҡ ҡылыусы, тип аңлатыла Ҡөрьән тәфсирендә. Шуның өсөн дә бер милләт вәкиле үҙен икенсе милләт вәкиле тип атаһа, ундай кеше Аллаһы Тәғәлә ләғнәтенә тарый. Тулҡын хәҙрәттең һүҙенә ҡеүәт: үҙеңдең милләтеңде һөйөүҙән тыш, мөьмин башҡа милләттәрҙе кәмһетергә тейеш түгел. Шул уҡ ваҡытта мосолмандың бер милләт вәкиле була тороп, үҙен икенсе милләт вәкиле тип атауы оло язаға тарыуына тиң.

**▸ Беҙҙең халыҡта "Хикмәт бар ерҙә михнәт бар" тигән әйтем бар. Быны нисек аңларға була һуң?**

**Тулҡын хәҙрәт:** Хикмәт еңел генә табылмай, уға өлгәшер өсөн кеше һынауҙар, ауырлыҡтар аша үтергә тейеш. Хикмәт күреп йәшәйем, тиһәң, михнәттәренә лә түҙәһең инде, тигән мәғәнә һалынған был әйтемгә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер генә сәғәткә булһа ла сит уйҙарҙан, шик-шөбһәләрҙән азат була алдығыҙмы, хөрмәтле уҡыусылар? Ана шул саҡтағы кисерештәрегеҙ хаҡында яҙып ебәрергә лә онотмағыҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡалдырған тәриҡәт юлын дауам итеүсе Зәйнулла ишан хәҙрәттәре үҙ заманында милләтебеҙҙе етәкләүсе заттан була. Был бер ҙә сер түгел, сөнки беҙҙең милләтебеҙгә хас булған тәриҡәт юлында һәр бер ырыу башлығы янында бер ишандың, рухи етәксенең булыуы беҙгә мәғлүм. Зәйнулла ишан Рәсүлевҡа килгәндә, уның хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр асылһа ла, уны өйрәнергә лә өйрәнергә әле. Сөнки беҙгә йыш ҡына сит ил, сит төбәк кешеләре килеп, һеҙҙең ырыуҙа шундай-шундай ғалим кешеләр, дин әһелдәре булған, тип әйтеүҙәрен ишетергә, шуны үҙебеҙ белмәгәнгә йөҙҙө ҡыҙартырға тура килә. Беҙ үҙебеҙҙең бөйөк шәхестәр тураһында, асылда, башҡа ҡәүем кешеләре, бигерәк тә урыҫ ғалимдары яҙмаларынан сығып ҡына беләбеҙ.*

*✓ Ауырыуға, сирлегә*
*Дарыу булыр Зәйнулла!*
*Вәлидигә, Рәмзигә*
*Бауыр булыр Зәйнулла!*
*Аллаһҡа тура юлды*
*Табыр булыр Зәйнулла!*



*Данлап йырым йырлаһам,*
*Бөтмәй ҙә торған йыр булыр...*
*Салауат Юлаев.*

**Бисмилләһи-ррәхмани-ррәхим!**

## Ишан булырҙай бала...

Тарих.
Мең дә һигеҙ йөҙ ҙә
Утыҙ өстә - сәнәлә*.
Хәҙергесә март айында,
Ни арба, ни санала...

Йөмле Уйҙың буйында,
Марттың Аҡман туйында,
Көнө түгел ни етте, -
Барған Ҡорбан ғәйете...

Боронғо ил Табында,
Шәрип тигән ауылда.
Хәбибулла өйөндә,
Барыһы ла һөйөнгән.

Сабый һалған ауазын,
(Шәрип шул уҡ Әүәҙ ул.)
Ишан булыр бер бала,
Ишан булыр бер малай.

Бартольд аҙаҡ әйткәндәй,
Йыназаһы еткәндә:
Халҡының рух короле,
(Аллаһ булыр пароле!)

Халҡы рухы түрендә,
Иң мөҡәтдәс үрендә
Король ҡорор пайтәхет...
Әйткән мулла Вау Вәхит.

Шундай бала тыуырын,
Уның ишан булырын:
-Килен, һаҡла ҡорһағың,
Тәүҙә уны уйла һин.

Унда ята, күрәмен,
Унда ята, беләмен:
Ишан булырҙай бала,
Ҡабаланма, абайла...

Илдә ир-ат тыуғанға,
Битен ҡояш йыуғанға,
Көлләһә лә ҡыуанған,
Илашҡан һәм йыуанған.

Сәңгелдәктә - Нурбала,
Сәңгелдәктә - Ҙурбала.
Киләсәге милләттең,
Нигеҙләүсе дәүләтте.

Инде күпме аҫыл зат,
Бәпәнәгә хасил зат.
Тыуҙыра бит Ҡыуаҡан.
Данлап күпме Уй аҡҡан.

Барын-Табын хәтерен,
Тарихтың иң хәтәрен
Әйт, Спартак йыраусы,
Ҡөйөң башла, ҡурайсы.

Ҡараһана, ҡарәле,
Ниндәй күркәм Нәрәле!
Ниндәй күркәм Уйташы,
Шатлығынан Уй ташыр.

Бар тәбиғәт уяныр,
Уяныр ҙа ҡыуаныр.
Ишан булырҙай бала
Бар донъяға ғәм һала.

Тиҙҙән ҡалҡыр күгүлән,
Асылыр һырт, түбәләр.
Яҙ артынан йәй булыр.
Тәпәндәргә май тулыр.

Болондарҙа, ҡырҙарҙа,
Күнелдәрҙә, йырҙарҙа
Уйнай башлар тай-тулаҡ.
Кешнәп ҡуйыр Аҡбуҙат.

Яҙ - ҡыштың илағаны,
Күҙ йәше тынмағаны.
Яҙ артынан йәй була
Йәйҙәр менән йәм тула.

Сабый - Аллаһ биҙәге,
Уның бер күҙәнәге.
Биҙәк, тимәк, зайн Аллаһ**
Аты булһын - Зәйнулла!

Ай, зайн Аллаһ, Зәйнулла!
Вай, зайн Аллаһ, Зәйнулла!
Аллаһҡа, бер Илаһҡа
Табындырыр Зәйнулла!
Тыуҙың оҙаҡ көттөрөп,
Һағындырып, Зәйнулла!
Шәфәғәткә, йәннәткә
Һарылдырыр Зәйнулла!
Тыуҙың күпме йөрәкте
Ҡабындырыр Зәйнулла!
Аллаһуға тоғролоҡто
Сағылдырыр Зәйнулла!

Аҙашҡанды, юлһыҙҙы
Табылдырыр Зәйнулла!
Киләсәккә үткәнде
Тағылдырыр Зәйнулла!
Ихласлыҡҡа, инсафҡа
Яғылдырыр Зәйнулла!
Күңелдәргә иманды
Ябындырыр Зәйнулла!
Хәҡиҡәткә, хаҡлыҡҡа
Ҡағылдырыр Зәйнулла!
Асылғанға йөрәге
Табын ҡорор Зәйнулла!
Шомланыуҙан, һағыштан
Арындырыр Зәйнулла!
Ваҡсыллыҡтан, хаслыҡтан
Ары торор Зәйнулла!
Көнсөллөктө, мөртәтте
Бағындырыр Зәйнулла!
Михнәттәргә, ыҙаға
Сабыр булыр Зәйнулла!
Ауырыуға, сирлегә
Дарыу булыр Зәйнулла!
Вәлидигә, Рәмзигә
Бауыр булыр Зәйнулла!
Аллаһҡа тура юлды
Табыр булыр Зәйнулла!
Ваһабиға ишекте
Ябыр булыр Зәйнулла!
Ҡаныҡҡанға хаҡына
Дауыл булыр Зәйнулла!
Асыҡҡанға, хәлһеҙгә
Ауыл булыр Зәйнулла!
Наҙанлыҡҡа, ваҡлыҡҡа
Ябырылыр Зәйнулла!
Мәңгелек ҡапҡаларын
Ҡағыр булыр Зәйнулла!
Ҡотоп-заман һимməтен
Алыр булыр Зәйнулла!
Шифа ямғырҙары булып
Яуыр булыр Зәйнулла!
Ай, зайн Аллаһ, Зәйнулла!
Вай, зайн Аллаһ, Зәйнулла!

Көн артынан көн үткән,
Ай үҫерен көн үҫкән.
Ундай бала һирәктер,
Бәләкәйҙән зирәктәр.

Тәүге дини белемде,
Унан килер гилемде
Ятлап бөткән Зәйнулла,
Атлап киткән Зәйнулла.

Тешәр сағы уҙғансы,
Ун икеһе тулғансы,
Мәҙрәсәлә - Шәриптә,
Өйрәнгән ул "Әлеп"те.

Аҙаҡ Малай-Муйнаҡта,
Ям юлдары бар яҡта
Ятлап бөткәс әлепте,
Аңлай башлай ҡәлепте.

Үсмер зирәк булғанға,
Һабағында уңғанға.
Ҡарамайса һис нигә,
Ынтылғанға белемгә...

Уға өмөт итәләр,
Дүрт күҙ менән көтәләр.
Ҡасан уҡып бөтөрөн,
Хәлфә булып китерен.

Әммә шәкерт күңеле
Борсолоуға күмелеп,
Һис тынғылыҡ тапмаған,

Ул шулай һамаҡлаған:
-Уҡып мулла булдың, ти,
Суҡып ҡарға булдың, ти.
Тик һыуһыным ҡанманы,
Мине һағыш ялманы.

Эх, Мөхәммәт, дуҫҡайым,
Йөрәгемде услайым...
Һабағымды ятланым,
Унда яуап тапманым.

Атам да ул һорауға
Килтерҙе тик юрауҙар.
Уй йылғаһы башында
Бәхәс булды ошондай...

### Атай менән улдың әйтешкәне...

-Улым, төбә ҡарашың,
Күренәме тау башы?
Ул беҙҙең йән төйәге,
Шунда бабам һөйәге...

Унда беҙҙе ҡырҙылар,
Шунан бында ҡыуҙылар.
Йорт һалып ултырҙылар,
Сит халыҡ тултырҙылар.

Ана шулай йорт-ерһеҙ,
Тороп ҡалдыҡ беҙ илһеҙ.
Башҡортҡа үтә ғәрлек -
Үҙ ереңдә типтәрлек.

Ярай булды Барындар,
Ҡәбиләләш-Табындар
Һыйындырҙы күсенә,
Биләмәһе эсенә.

Еребеҙҙе ҡалдырып,
Йөрәгебеҙ яндырып,
Ырыуыбыҙ Ҡыуаҡан
Күсеп килде был яҡҡа...

-Атай, йәндең төйәге,
Ата-баба һөйәге.
Тороп ҡалғас Исәттә,
Беҙ һанда юҡ, иҫәптә...

Йәнебеҙ бит тегендә,
Беҙ был ергә тибелгәс ...
Сарабыҙ һуң юҡмы ни,
Беҙ донъяла юҡмы ни?

Беҙгә нихәл итергә?
Буленгәнбеҙ икегә...
Ни үлə лә, ни тере,
Атай, нимә әйтерең?

-Улым, күпме яу уҙҙы,
Енер өсөн яуыҙы.
Бәпәнәләр, Салауат
Яуға сапты сарбайлап.

Әммә дошман сиреүе...
Бер туҡтауһыҙ килеүе.
Сафтарыбыҙ кәмене,
Ә тарихта кем инек...

Кемдәр генә килмәне,
Уралды һис бирмәнек.
Һәҙиәһен Алланың
Һис кем яулай алманы.

Дошман ҡора мәкерен,
Мәкерҙең иң хәтәрен.

Алалмаған Уралды,
Һынамаҡ дин ҡоралды.

Беҙгә ҡурҡыу индермәк,
Буйһоноуға күндермәк.
Ҡыумаҡ беҙҙән Алланы,
Аллаһыҙ тиҙ яуланыр.

Аң булмаһаҡ, туң булһаҡ,
Иртә булмай, һуң булһаҡ,-
Аңыбыҙҙы баҫа бит,
Салахит һәм ваһабит.

Илап та беҙ ҡараныҡ,
Олоп та беҙ ҡараныҡ.
Олой торғас Вау бабаң
Вауға әйләнде тамам.

Ерһеҙ ҡалһаң, иларһың,
Илау түгел, олорһоң.
Бабаң беҙҙең һағыш ул,
Асырғаныу тауышы.

-Атай, ҡара, ҡарәле,
Беҙ донъяла бар әле.
Бар тағы Хаҡ Тәғәлә
Йөрәк тигән ҡәлғәлә.

Ул һәр ерҙә, һиндә лә,
Бер өләшә миндә лә.
Ҡушылһаҡ әгәр икәү,
Алланың ҡулы дүртәү.

Тағы икәү ҡушылһа,
Дүрт йөрәк бер, ҡуш булһа,-
Дүрт яғыбыҙ уяулы,
Булырбыҙ дүрт таяулы.

Шуны хәҙер аңланым:
Йөрәктәргә Алланы
Кәрәк беҙгә күсереү,
Бының серен төшөнөү.

Хоҙай беҙҙе яралтҡан,
Яралтҡан һәм яратҡан.
Сикһеҙ уның ҡөҙрәте,
Яҙмышыбыҙ үҙгәртер.

Тубыҡланып торайыҡ,
Унан ярҙам һорайыҡ.
Әйҙә, уға барайыҡ,
Барыр юлдар табайыҡ...

Бик тәрәнгә киткән һуң,
Һүҙ ошонда еткән һуң,-
Хәбибулла туҡталды,
Оҙаҡ ҡына уйланды.

Бер аҙ ғына ял итеп,
Тәһәрәтен яңыртып, -
Уҡып намаҙ, зекерен,
Әйтеп ҡуйҙы фекерен:

-Улым, асыҡ йөрәгең,
Тик бик абай йөрә һин...

Йөрәктәре асыҡҡа
Тәүге таш тейә, һаҡлан!

Күрәм, юлың дин юлы,
Үтерһең дә һин уны.
Был юлда бар төрлөһө,
Сафы ла бар, керлеһе.

Зиһенле бар, тинтәк тә,
Кемелер көн итмәккә,
Дингә килеп һыйынған,
Оялаған, нығынған.

Күрәм, юлың бик алыҫ,
Еңел түгел, бик ауыр.
Саф булғанға ниәтең,
Һуғыр сәғәт-мөҙҙәтең.

Яуызлыҡты көс менән,
Ғәскәреңде һөс менән.
Мөмкин түгел еңеүе,
Был еңелеү иң элек.

Тик яҡшыға юрайым,
Хоҙайҙан да һорайым:
Һаҡла баламды, Аллаһ,
Ул юлынан туҡтамаҫ!

Зәйнулла Уй буйлаған,
Уй буйлап уй уйлаған:
Нинә халҡы әмәлен,
Яҡшыртмай һуң ғәмәле?

Халҡы бер иш самала-
Ни арба, ни санала?
Исәттә ҡалған йәне,
Уйҙа ҡыбырҙай тәне...

Һорауҙары - яуапһыҙ,
Юрауҙары - сауапһыҙ.
Бер аҙ уҡып Муйнаҡта,
Күңеләнә уй ятҡан...

Шуға үсмер төтмәгән***,
Уҡыуын да бөтмәгән,
Уй, йөрәге ҡуҙғалған.
Өстамаҡҡа юл алған.

### Өстамаҡҡа йыр

Эй, Өстамаҡ, эй, Өстамаҡ,
Уй, Өйәлге һәм Һанар.
Ожмахтарҙа йөшәүсе лә
Йәмдәреңә ымһыныр.

Эй, Өстамаҡ, эй, Өстамаҡ -
Тамағы өс йылғаның.
Ул донъяның картаһында,
Троицк тип аталғаны.

Башҡорт ерен баҫып алып,
Батша ҡәлғә һалғаны.
Көнсығыштан Уралтауҙы,
Илде ҡамап алғаны.

Өс тарафтан аҡҡан йылға
Бер ерҙә осрашҡаны.
Өс юҫыҡта тыуған уйҙың
Бер ерҙә ойошҡаны.

Бүгәс менән Де-Колонгтың,
(Аҡтар менән ҡыҙылдарҙың)
Йән өсөн өҙөшкән ер.
Европалы, азиаттың
Баҙарҙа күрешкән ер.

Эй, Өстамаҡ, эй, Өстамаҡ,
Уй, Өйәлге һәм Һанар.
Ошо ерҙе һаҡлап биргән
Ҡорбандарҙы кем һанар?

Бәпәнәләр, Йосоп, Аҡай
Тарихтарын кем яҙыр?
Улар яҙған ҡаны менән,
Ҡәләм менән кем алыҡ?

Ҡәлғә һалғас, һәммә халыҡ
Килеп тулған кемуҙар.
Әйтерһең дә Өстамаҡта
Тәҙөгәндәр коммунар...

Өс юҫыҡта тыуған уйҙың
Тәүгеһе - асырғаныу.
Әммә ҡалдәр яҡшырмаҫ шул
Кемгәләр асыуланып.

Тик күбәләк тәләф була,
Янған утҡа ташланып.
Асыуланыу - хәҙер бары
Көсһеҙлектә фашланыу.




*сәнә - (ғәр.) йыл, **зайн Аллаһ - (ғәр.) Алла биҙәге, ***төтмәгән - (диалект) түҙмәгән.

✓ *Ысынында белгән батша*
*Динле башҡорт еңелмәç.*
*Йөрәгендә Аллаһ булһа,*
*Башы түбән эйелмәç.*
*Мөмкин түгел асылыңды,*
*Булмышыңды үҙгәртеү.*



Шаһит киткән батырҙарҙың
Хаҡ булған гәмәлдәре.
Туҡтатҡан ул батшалыҡтың
"Тәреле" әмәлдәрен.

Хоҙай үҙе бойорғандыр
Көрәп башҡорт халдәрен.
Дине, ере, теле өсөн
Биргән саҡта йәндәрен...

Өс юҫыҡта тыуған уйҙың
Икенсеһе - гәмдәлер.
Көндәребеҙ ҡыҫҡара ла,
Оҙоная төндәре.

Нинә сәсән, аҡындарҙың
Ишетелмәй өндәре?
Нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк
Тәндә булһа йәндәрен?

Йылдан-йылға сигенәбеҙ
Уралтауҙың эсенә.
Сит-яттарға тороп ҡалды
Исәт һыу ҙа, Әсәм дә...

Киҫкеләнеп бөттөк инде,
Уйым һыймай хисемә.
Йылдан-йылға ярҙарыбыҙ
Ишелә лә, ишелә.

Минзәләләр, Һамар, Ҡорған,
Һарытауҙар, Кәрәлек.
Туҡ, Сорандар, Ҙур Ырғыҙға
Ҡойоп яткан Кәмәлек...

Был ерҙәрҙең халҡыбыҙға
Бөттөмө ни кәрәге?
Сигенеүҙең һуңғы сиге -
Үҙ-үҙеңә терәлеү.

Үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай,
Хет йүгермә, хет йүгер.
Ҡотолормон тимә хатта
Ҡасып, йәшенеп, үлеп...

Үҙ-үҙеңдең арьяғында
Ҡалалыр бары күңел.
Сөңгөлдәрҙә йөрәк ҡала
Ул батшаныҡы түгел.

Сөңгөләндә ҡәлебең бар,
Ул батшаныҡы түгел.
Тик Аллаһтың урыны ул,
Юҡ, башҡаныҡы түгел.

Бер һүҙ менән "мәхлүк" тиҙәр
Бот ҡыҫтырған баҡаны.
Сөңгөләндә ҡәлебең бар,
Ул - Аллаһтың маҡаны.

Һүҙ әйтерлек хәлең юҡта,
Ирендәрең кибеүҙән.
"Аллаһ!" тиеп типкән йөрәк
Туҡтаһа ла тибеүҙән.

Туҡтамаç һис уның йәне
"Аллам, Аллаһ!" тиеүҙән.
Былдай заттың вариҫтары
Бирешмәç һис иҙеүгә.

Шуға күрә өс юҫыҡтың
Өсөнсөһө - динебеҙ.
Әлмисактан килгән шулай:
Динебеҙҙә - көнөбөҙ.

"Әсәй!"- тәүге һүҙебеҙ ҙә,
"Аллаһ!" - һуңғы өнөбөҙ.
Өммәтебеҙ ошо һүҙҙе
Әйткәнгә лә, тере беҙ.

Эй, Өстамаҡ, эй, Өстамаҡ,
Уй, Өйәлге һәм Һанар.
Һаҡлар өсөн ерен, халҡын
Барған һинә Зәйнуллаһ.

Өс юҫыҡта тыуған уйҙы
Уҡмаштырып, мең уйлап.
"Рәсүлиә" мәҙрәсәһен
Асҡан һиндә Зәйнуллаһ.

Ҡалыплашҡан ҡараштарҙан
Азат булыр мәҙрәсә.
Күпме аҫыл йөрәктәргә
Ҡанат ҡуйыр мәҙрәсә.

Һаман артҡа һөйрәлербеҙ
Уҡыһаҡ гел ҡәҙимсә.
Ҡәҙимсәнең яндауына
Мисәү булыр йәҙитсә.

Ҡәҙимсәме, йәҙитсәме?
Булһын ябай - әҙәмсә.
"Академик институт", тип
Әйткән француз Бенигсен.

Рус, ғәрәп, төрки телдәре,
Фарсы, математика,
Физика ла, химия ла,
Гигиена, этика.

География, матур яҙыу,
Тарих, зоология,
Мосолмандың хоҡуғы һәм
Тағы теология.

Тағы әллә күпме фәндәр,
Бихисап, китһәң һанап...
Донъяның бар аҡылынан
Тупланған китапхана.

Педагогик алымдарға
Ятҡан Ҡөрьән тәфсире.
Сағыштырып өйрәнелгән
Яңылыҡ һәм иҫкелек.

Был мосолман өммәтендә
Иң ҙур булған ҡаҙаныш.
Донъяуи фән серен сискән
Башҡорт, татар, ҡаҙағы...

Нуриәгзәм Таһиров һәм
Шағир Мәжит Ғафури.
Ҡорбанғәлиев һәм Инан,
Ғәлимйән әл-Баруди...

Тамъяниҙар, Халиковтар,
Ғабдрахман Рәсүлев...
Өстамаҡта белем алып
Ҙур донъяға сәселер.

Ҡаҙаҡ далалары буйлап
Сығып китер Аҡмулла.
Зәйнулланың мөриттәре
Йөрөп ятыр аҡ юлдан,
Йөрөп ятыр хаҡ юлда.

Ризаитдин Фәхретдинов
Яҙыр мәшһүр "Аҫар"ын.
Рәмзи яҙыр меңгә торош
Бер "Тәлфиҡ әл-әхбәр"ен.

Тап шул мәлдә Рәсәй-карап
Айҡалыр ҙа сайҡалыр.
Вәлидиҙәр һәм Бабичтар
Ил һаҡларға саң ҡағыр.

Йөрәктәре уянғандар
Шул саҡ атҡа атланыр.
Ҡотоп-заман Зәйнулланың
Өмөттәре аҡланыр,
Өр-яңы көн башланыр...

Эй, Өстамаҡ, эй, Өстамаҡ,
Уй, Өйәлге һәм Һанар.
Республика осҡоно бит
Беләм, һиндә ҡабынған.

Ғәскәрең бар, дәүләтең бар,
Ҡуйылыр көс, талап та...
Федерацияла Рәсәй
Башланған Өстамаҡтан.

Рәсәйҙәге һәр халыҡҡа
Республика - айырым.
Тарих көтә хәҡиҡәтте
Бар халыҡтар таныһын.

Бының өсөн биргән башҡорт
Миллиондарса ҡорбан.
Йөрәктәре уларҙың
"Аллаһ!" тип тибеп торған.

Күптән инде ул заттарҙың
Йомолһа ла күҙҙәре.
Баҡыйлыҡ һыҙығын үтеп,
Юғалһа ла үҙҙәре.

Йөрәктәре тибеп тора,
Ваҡытты беҙҙең һанап.
Үткән, бөгөн һәм киләсәк -
Уй, Өйәлге һәм Һанар.

## Вологдала Зәйнулланың Ғатауллаға әйткәне...

Ғатаулла, екһетте бит
Нужнаның был һурпаһы.
Ахырыһы яҙмышыбыҙ
Төйөрә был - туртаһы.

Ятҡан ерҙәребеҙ бында
Рәсәйҙең уртаһында.
Мосолманһыҙ һәм мәсетһеҙ
Нисек йәшәй Вологда?

Йылҡы ите ашамағас,
Тәнебеҙ арыҡ инде.
Һин нисектер, мин күптәндән
Барынан ғарыҡ инде.

Балаларым һағындыра,
Һағынам әсәләрен.
Белеп торам, күреп торам
Зарығып йәшәүҙәрен.

Әсирлектә мөҙҙәтебеҙ
Бармаç, тием оҙаҡҡа.
Йөрәгендә Аллаһ барҙы
Буламы һуң йоҙаҡлап?

Тәнебеҙҙе йоҙаҡлауҙан
Ни фәтеүә уларға?
Тура килер бит уларға
Тик һуңынан иларға.

Улар бында беҙҙе түгел,
Алланы бикләмәксе.
Үҙҙәрен яралтыусыны
Иркенән сикләмәксе.

Әллә инде улар шулай
Үҙ-үҙенә ҡарыша?
Йөрәгебеҙҙәген әллә
Күрмәмешкә һалыша.

Улар бында беҙҙе түгел
Үҙ-үҙҙәрен бикләне.
Беҙ ирекле, йөрәгебеҙ
Беләм ҡайҙа икәнен.

Йөрәкте бит бикләп булмай,
Булмай бикләп күңелде.
Юлыбыҙҙа Аллаһуға
Килә бары йүгерге...

Халҡыбыҙ ҙа мәңге йәшәр
Ошо хаҡта аңлаһа.
Аллаһуға барыр юлды,
Тәриҡәтте һанлаһа.

Тик шуныһы үкендерә,
Һүҙем ялыу хаҡында:
Үҙебеҙҙең ҡәүемдән бар
Ошаҡсылар сафында.

Тик шуныһын аңлау мөһим -
Тәриҡәттә хаҡлыбыҙ.
Нимә әле? Шундай һыйыр...
Азат түгел халҡыбыҙ.

Күҙле көйө күҙһеҙҙәр бар,
Күр Шәмсетдин Зәкине...
Күҙһеҙ ҙә ул хәҡиҡәтте
Ҡәлебендә уҡыны.

Тек күҙенде, ә йөрәгең
Күҙең булһын, ти Руми.
Баҡыйлыҡҡа хәҡиҡәтте
Аңлап күс, ти Бируни.

Осоп ҡына ҡайтыр инем
Хикмәт арбаларында.
Сарпыуҙары тейер тием
Гәзиз балаларыма.

## Ҡыҫҡырып зекер әйтеү

Истанбулдың таш мәсете,
Танһыҡ көмөш һауаһы.
Тәриҡәткә ант әйттерә.
Зыя Көмөшханауи.

Хаж гәмәле ҡылғандан һуң
Илгә ҡайтып барышлай.
Ике тапҡыр Зәйнулланы
Ҡабул итә, ҡарышмай.

Мөхәммәттән, бәйгәмбәрҙән
Башланған был силсилә.
Алла хозурында булыу
Сере бында сиселә.

Шәриғәттең төп шарттары
Үтәлер был тассауф.
Хөсәйенбәк аша уны
Беҙгә илткән Йәсәүи.

Нәҡшбәндиә, Ҡәҙириә -
Тәриҡәт алымдары.
Аллаһуға барған юлда
Был мөьмин аҙымдары.

Ул Аллаһҡа зекер әйтеп
Хәләүәттә ултырыу.
Йөрәгенде, күңеленде
Аллаһ менән тултырыу.

Ул Мөхәммәт силсиләһе,
Ул Аллаһу хозуры.
Тик ихластар һәм инсафтар
Шул хозурға уҙыр ул.

Тик йөрәге асыҡтарға
Мөмкин булған бәхеттер.
Был бәхеттең бәхетелер,
Тәхеттәрҙең тәхете.

Тәүлегенә йөҙ мең "Аллаһ!"
Ҡоштар ҡабатлай, тиҙәр.
Аллаһуның рәхмәтенән
Улар ҡанатлы, тиҙәр.

Туфан баҫыуҙары ҡалҡып,
Зилзилә ҡупҡан мәлдә.
Ҡоштар ҡунып ҡаяларға
Иҫән ҡалғандар ерҙә.

Ҡош аулаған йәлсемәç, тип
Әйтәләр шуға беҙҙә.
Тик нинә ҡоштарҙан быны
Алмайбыҙ үҙебеҙгә?

Аллаһуға тоғролоҡтор
Ҡотҡарыр Нух кәмәһе.
Нисә мөьмин бергә әйтер:
"Аллаһу ла, Аллаһу!"

Ишан-хәҙрәт Хаждан ҡайтҡас,
Гөрләп торған Аҡҡужа.
Алла нуры төшкән ауыл
Сыңлап торған балҡыуҙан.

Аҡҡужаға был көндәрҙә
Барса башҡорт ағылған.
Төрлө-төрлө ырыу-күстән,
Ян-яҡтан, йөҙ ауылдан.

Барсаһының йөҙҙәренә
Аллаһ нуры яғылған.
"Аллаһ" һүҙе яңғыраған
Бер юлы мең ауыҙҙан.

Оран булып яңғыраған
Ауазы зайн Алланың.
Халыҡ Аллаһ илсеһеләй
Тәбрикләй Зәйнулланы.

Лә илаһи иллалаһу
Мөхәммәд рәсүлуллаһ...
Аллаһуға зекер әйтә
Ҡотоп заман Зәйнуллаһ.

Лә илаһи иллалаһу
Мөхәммәд рәсүлуллаһ...
Аллаһуға маҡтау йырлай
Ҡотоп заман Зәйнуллаһ.

Аллаһу, Аллаһу, Аллаһу,
Аллаһу, Аллаһу, Аллаһу,
Аллаһу, Аллаһу, Аллаһу,
Аллаһу, Аллаһу, Аллаһу...

Эй, милләтем Аллаһуға
Маҡтау йырла, данла һуң...
Беҙҙең йәшәү хәлебеҙҙе,
Эй, Аллаһу, аңла һуң!

Һинең ҡөҙрәтеңә генә
Ышанабыҙ, Аллаһу!
Дауылдарҙан, ғәрәсәттән
Ышығыбыҙ, Аллаһу!

Һинең ҡөҙрәтеңдән генә
Яралғанбыҙ, Аллаһу!
Ер йөҙөнә халыҡ булып
Таралғанбыҙ, Аллаһу!

Дәһрилеккә Һине әйтеп
Ташланабыҙ, Аллаһу!
Һинең мәрхәмәттән генә
Башланабыҙ, Аллаһу!

Ҡөҙрәтең киң, халҡыбыҙға
Имәнлек бир, Аллаһу!
Рухыбыҙҙы сүкей торған
Тимерлек бир, Аллаһу!

Юҡ Һин бирмә, бойор ғына,
Әҙербеҙ беҙ, Аллаһу!
Утына ла, һыуына ла
Инербеҙ беҙ, Аллаһу!

Кемгәлер бит оҡшамаған
Ҡыҫҡырып зекер әйтеү.
Имеш, ул бер тәриҡәтте
Икенсегә үҙгәртеү.

Имеш тә, Зәйнулла хажда
Өйрәнгән яман ғәҙәт.
Имеш, халыҡ йыйылыуға
Шул ғәҙәт икән сәбәп.

Аллаһуға маҡтау йырлап,
Имеш, ул йәм ебәрә.
Имеш, кемдер Аҡҡужала
Күргән икән ен-пәрей...

Ғатаулла, Зәйнулланы
Һөргән ебәрер сәбәп.
Аллаһуға маҡтау йырлау
Буламы насар ғәҙәт?

Нисек итеп ҡыҫҡырмаçһың
Ҡыҙған тимер баçһалар?
Быуат һайын карателдәр
Яндырһалар, аçһалар.

Асырғанып йән тулаһа,
Нисек шып-шым иларһың?
Аллаһҡа маҡтау йырҙы
Нисек өнһөҙ йырларһың?

Вау бабаһының хәлдәре
Хәтәр булған, аңлаһаң.
Ул бүреләр лөгәтендә
Зекер әйткән Аллаға.

Ысынында белгән батша
Динле башҡорт еңелмәç.
Йөрәгендә Аллаһ булһа,
Башы түбән эйелмәç.

Мөмкин түгел асылыңды,
Булмышыңды үҙгәртеү.
Илгә оран кеүек булған
Ҡыҫҡырып зекер әйтеү.

Яҙыҡ микән һөйөү һүҙең
Ҡапыл китһә ысҡынып?
Донъя ишетерлек итеп
Зекер әйтеү ҡыҫҡырып.

Уралтауҙа әйтелгән һүҙ
Далаларға тиҙ етер.
Йөрәктәре асыҡтарға
Әйтеү ҡыҫҡырып зекер.

Шул тауышҡа Уралтауҙа
Ат менгән баһадирҙар.
Уларҙың тын алышынан
Өр(ө)ккән ваһабиҙар.

Атлы башҡорт күрһә, ҡасҡан
Немец фашистары ла.
Лә илаһи иллалаһу
Мөхәммәд рәсүлуллаһ...

## Ишандың Вәлидиҙе һынағаны

Был - ғилемгә, мәғрифәткә
Тулыһынса буйһоноу.
Ҡайһы уҡыу йортонда һуң
Бармы икән был һынау?

Йә, әйтегеҙ, ниндәй ЕГЭ,
Йә дәүләти имтихан?
Йә кем кемде, аҡса биреп
Ишан кеүек һынаған?

Ғәм алдында, әйбер ал, тип
Аҡса биргән Зәкигә.
Был беҙҙенсә - тәмлекәскә,
Хәлүә, кәнфит, бәкегә...

Беҙ беләбеҙ, һыу ҡойһаң да,
Аҡса үсмәй баҡсала.
Күпме әйбер килә икән
Ун тин алтын аҡсаға?

Алтындың хаҡ, миҡдарҙарын
Йә, кемдәр белә икән?
Ул аҡсаға биш тин ҡушһаң,
Машина килә микән?

Хикмәт шунда: нисә көндән
Ишан ҡарап тураға.
Мин биргәнгә ни алдың, тип
Зәкиҙән ул һораған.


**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Уның кеүек егеттәр етерлек ауылыбыҙҙа. Шуға ла инде, ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәк кеүек, яҙын-көҙөн ауылыбыҙҙа өр-яңы өйҙәр күтәрелеп кенә тора. Асы ауылы үҫә, төҙөкләнә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАШ ЭШЛӘҺЕН, ТИҺӘҢ...

## көн һайын йүгер

■ Физкультура мускулдар өсөн генә түгел, баш мейеһе өсөн дә файҙалы, тип белдерә Иллинойс университеты эксперты Арт Крамер. Әлеге ваҡытта физик күнекмәләрҙең баш мейеһе структураһының критик структура үлсәмен ҙурайтыуға һәм балаларҙың, шулай уҡ ололарҙың когнитив һәләттәрен яҡшыртыуға булышлыҡ итеүен раҫлаған тиҫтәгә яҡын тикшеренеү бар. Кешеләргә үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, даими физик күнекмәләр, мәҫәлән, атлап йөрөү аҡыл һәләттәрен дә үҫтерә. "Спорт медицинаһы" белдереүенсә, ололарҙың мейе структураһы яҡшыра, ул функцияларын әүҙемерәк башҡара. Әйткәндәй, көндәлек башҡарған ғәҙәти эштәрҙе икенсе ысулдар менән башҡарыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, иртән тештәрегеҙҙе һул ҡул менән таҙартығыҙ, был саҡта һеҙ баш мейеһенә лә "күнекмә" үткәрәһегеҙ.

■ Бал ҡорто ағыуы составындағы мелиттин тип йөрөтөлгән токсин ВИЧ ҡуҙәнәктәрен хәүефһеҙ рәүештә юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Был турала АҠШ-ның Медицина мәктәбе университеты белгестәре белдерә. Әлегә ВИЧ-ҡа ҡаршы дарыу уйлап сығарыу тураһында һүҙ бармай. Әгәр ҙә һөҙөмтәләр раҫланһа, вирус менән зарарланыуҙан һаҡлаусы профилактик сара формаһы эшләнәсәк. Хеҙмәттең авторы Джошуа Гуд әйтеүенсә, мелиттин ҡайһы бер вирусҡарҙы һәм яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара.

■ Депрессияға бирелмәйем тиһәң, йышыраҡ помидор аша, тип кәңәш итә Ҡытайҙың Тяньцзинь медицина университеты ғалимдары. Улар әйтеүенсә, кем аҙнаһына ике таҡтыр помидор ашай, депрессия уны мотлаҡ урап үтәсәк. 70 йәште үткән 1 мең кешенең ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, аҙнаһына 2-6 таҡтыр помидор ашаусыларҙа депрессия 46 процентҡа, ә көн һайын ашаусыларҙа 52 процентҡа һирәгерәк осраған.

■ Диетолог Рэчел Беллер белдереүенсә, суши "Биг Мак" һәм фри картуфына ҡарағанда ла калориялы булыуы ихтимал. Ғәҙәти суши-ролл 290-350 калорийҙан тора, углевод күләме буйынса ул дүрт телем икмәккә тиң. Диетолог белдереүенсә, бал ризыҡтарҙа балыҡ күләме бик әҙ. Медиктар әйтеүенсә, 1 порция балыҡ 140 грамм тартырға тейеш, мәҫәлән, "Калифорния" роллында ул бары 5 грамм. Тимәк, 1 порция балыҡ килеп сыҡһын өсөн 28 суши ашарға тура киләсәк. Сушиҙың нигеҙен аҡ дөгө алып тора, ул ҡайһы саҡта ризыҡтың 75 процентын тәшкил итә. Оҙайлы эшкәртеү үткәндән һуң, дөгөлә витаминдар ҙа, минералдар ҙа ҡалмай. Етмәһә, был дөгөнө әҙерләгәндә шәкәр ҡулланыла.

■ Әскелтем тәмле ризыҡтар астма өйәнәген туҡтатыу һәләтенә эйә, тип белдерә Массачусетс университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре. Әскелтем тәм тын юлдары күҙәнәктәренең тәм рецепторҙарын әүҙемләштерә, был мускулдарҙы йомшартып, һауаның үтеүенә булышлыҡ итә. Был астма ауырыуынан яңы дарыуҙар эшләүҙә ярҙам итәсәк. Тәм рецепторҙары әсе тәмде тойһаҡ та, организмға хәүефле, мәҫәлән, әсегән йәки ағыуланған ризыҡ тураһында мәғлүмәт ебәрә. Астма ваҡытында тын юлдарының өҫкө өлөшө күҙәнәктәре артыҡ йыш ҡыҫҡара, был тын алыу менән бәйле проблемаларға килтерә. Ә әсе тәм тойған рецепторҙар күҙәнәктәрҙе йомшартыу һәләтенә эйә.

ШАҢДАУ

# БЕҘ ГӘЗИТ УҠЫЙБЫҘ,

## йәки "параллель донъянан" яуап хаты

**Фәүзиә Яхина апайҙың "Интернеттағылар... параллель донъяла йәшәй һымаҡ" тигән мәҡәләһен (11-се һан) уҡығас, яуап яҙмай булдыра алмайым. Мәҡәлә, бер яҡтан, ҡыуандырһа, икенсе яҡтан, борсолдороп ҡуйҙы. Халыҡҡа мәғлүмәтте ирекле, бушлай таратыу сәйәсәте һәм ысулдары, яңы мәғлүмәт технологиялары тураһында аңлатыу етмәй, тигән һығымтаға килдем. Бәлки, был хатым бер ни тиклем асыҡлыҡ индерер.**

Ысынлап та, Башҡорт Википедияһы һәм уның башҡа туғандаш проекттары "Беҙ, башҡорттар, бар! Беҙ бында!" тип бар донъяға оран һала. Шул оранды ишетеп, бик күп сит милләт, сит ил кешеләре Башҡортостан һәм башҡорттар булыуы тураһында белде. Белеп кенә ҡалманы, ә Башҡорт Википедияһын үҫтереүҙә әүҙем ҡатнашалар ҙа. Әйтәйек, немец егете Рене Филипп, ҡаҙаҡ егете Болатбек һәм урыҫ егете Виталий компьютер программаһы ярҙамында мәҡәләләр төҙөү ысулын өйрәтте. Башҡортостандың бар ауылдары тураһында башланғыс мәҡәләләр улар ярҙамы менән төҙөлдө. Француз ғалимы Дидье Дискуэн төшөргән фоторәсемдәр үҫемлектәр, йәнлектәр, ҡоштар тураһындағы мәҡәләләрҙе биҙәй. Башҡорт Википедияһы аша беҙҙең мөхитте генә түгел, телебеҙҙе өйрәнеүселәр бар. Япон талибы Юто Һишияма киләсәктә башҡорт теле уҡытыусыһы булырға әҙерләнә. Барыһын да һанай китһәң, үҙҙәре бер китаплыҡ булыр. Әлеге көнгә Башҡорт Википедияһында бөтә донъянан 8 меңгә яҡын ҡатнашыусы теркәлгән. Һуңғы 30 көндә 75 мөхәррир ниндәйҙер өҫтәмә индергән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙебеҙҙең милләт вәкилдәре уларҙың өҫтән бер өлөшөн генә тәшкил итә. Быны халҡыбыҙға хас булған шикләнеү, төплө итеп тикшереп ҡарау сифаты менән бәйләргә лә булалыр. Әллә инде проекттар тураһында әҙ белеүебеҙме, йәки башҡа төрлө сәбәп бармы?

Интернеттағы мәғлүмәттең юғалып ҡуйыу ҡурҡынысы бар, әлбиттә. Әммә, вики проекттар был йәһәттән ышаныслы һаҡланған. Мәғлүмәт тупланған 350-нән ашыу сервер өс ҡитғаның өс ҡалаһында урынлашҡан, компьютер вирустарына бирешмәгән Linux системаһында эшләй. Википедиялағы мәғлүмәтте бер ниндәй сикләүһеҙ икенсе ергә күсереп алырға рөхсәт ителә һәм ундай күсермәләрҙе башҡа бик күп сайттарҙа осратырға була. Был мәғлүмәтте юғалтыу ҡурҡынысын тағы кәметә. Википедияның үҙендә мәҡәләгә индерелгән һәр төҙәтеү айырым һаҡланып бара.

Шул уҡ ваҡытта вики проекттарҙа бик унайлы булған "Китап оҫтаһы" исемле ҡоралнамә бар. Был инде бөтәбеҙ күнеккән ҡағыҙ нөсхәне һәр кем үҙ аллы нәшер итеү өсөн эшләнгән. Әйткәндәй, яңыраҡ Себер тарафтарынан шундай хат алдым: "Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар" трилогияһының тәүге ике китабын Викикитапханала таптым. "Китап оҫтаһы" аша баҫтырып алып, уҡып сыҡтым. Компьютер аша уҡырға яратмайым. Өсөнсө китабы Викикитапханала ҡасан була?" Эйе, Интернет селтәрендә башҡорт телендә мәғлүмәт булыу Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ өсөн бик мөһим. Шуның өсөн Википедияла мәҡәләләр яҙыу, Викиуниверситет, Викикитапхана, Викикитап, Викиөҙөмтә, Викиһүҙлек, Викимилек, Викиһандар, Викисәйәхәт кеүек проекттар менән шөғөлләнеү халҡыбыҙ өсөн файҙалы эш булыуына инаныусылар бар.

Һис шикһеҙ, интернет селтәрендәге башҡорт телле проекттар башҡорт телен ҡулланыу даирәһен киңәйтеү ысулы булып тора. Башҡорттоң тормошҡа булған ҡарашын йәш быуынға еткереү менән бер рәттән, уны бар донъя халыҡтарына ла таныта. Шул уҡ ваҡытта мәғлүмәт таратыуҙың быға тиклем булған ысулдарынан да баш тартырға ярамай. Ата-бабаларыбыҙҙың ташҡа соҡоп яҙылған боронғо яҙмаларын, юлдар төҙөйбөҙ, тип ергә күмдерҙеләр. "Иҫке яҙыу, файҙаһы юҡ" тип, күпме ғәрәп яҙмаһындағы китаптарыбыҙ утҡа яғылды! Уларҙы кире тергеҙеү мөмкин түгел. Ни өсөн шулай булды һуң? Бала саҡтан гәзит-журнал, китап уҡырға әүәҫ булдым. 14-15 йәшкә ауылдағы барлыҡ китапты уҡып сыҡҡанмындыр. Тик бер һорау мейемде өйкәп торҙо: "Нинә Әхәт бабайҙы наҙан тип әйтәләр? Ул бит ҡалын-ҡалын китаптар уҡый? Нинә беҙҙе ул китаптарҙы уҡырға өйрәтмәйҙәр?" Яуапты тик олоғайғас, совет архивтары асылып, 1917 йылғы инҡилапҡа тиклем нәшер ителгән төрлө сығанаҡтарҙы уҡығас ҡына аңланым: "Башҡорт бер ҡайсан да наҙан булмаған! Башта уны яһалма наҙан иткәндәр, унан "наҙанлыҡтан" ҡотҡарғандар", тип оран һалғым килде.

Кешелек донъяһы туплаған барлыҡ ғилем, барлыҡ мәғлүмәт менән һәр милләт кешеһе үҙенең туған телендә ирекле һәм бушлай таныша алырға тейеш! Был оран Википедия һәм уның туғандаш проекттары төҙөүсө 286 милләт вәкиленән торған 40 миллион донъя ирекмәненең уртаҡ ҡарашы. Башҡа халыҡтар өсөн файҙалы тип иҫәпләгән шөғөл башҡорт халҡы өсөн файҙалы була аламы? Википедиясылар ниндәй "параллелдә" йәшәгәнен күреү өсөн Википедияла яҙышып ҡарарға кәрәктер. Теләүселәр булһа, беҙҙең уҡыуҙар бушлай.

**Рөстәм НУРЫЕВ,**
**2005 йылдан Википедия ирекмәне.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# КӨН КҮРӘЙЕМ, ТИГӘНГӘ...

## юлдары бар

**Заман башҡа -заң башҡа, тигәндәй, бөгөн ауылдар тормошонда ла ҙур үҙгәрештәр бара. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балалар әҙ булыуы сәбәпле, күп ерҙәрҙә ауыл мәктәптәре, дауаханалар ябыла. Ләкин ауыл халҡы төшөнкөлөккә бирелеп, эшһеҙ, ҡул ҡаушырып ултырмай. Нисек тә булһа көн күреү юлдарын эҙләй, ғаиләләр ҡора.**

Йәштәр ялҡау, булдыҡһыҙ, тигән фекер менән бөтөнләй килешмәйем. 90-сы йылдар менән сағыштырғанда, бөгөнгө ауыл йәштәре күпкә маҡсатлыраҡ. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән мәҡәл беҙҙең Асы ауылы йәштәренә лә тап килеп кенә тора. Улар заманға яраҡлашырға, үҙҙәренә ниндәйҙер шөғөл табырға тырыша. Миҫал итеп Шәрипов Булатты алырға була. Әрме сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң үҙ көсө менән йорт һалып, ғаилә ҡороп ебәрҙе. Бөгөнгө көндә ике ҡыҙ үҫтерәләр. Ауылдағы барлыҡ йәштәргә өлгө булырлыҡ бик яҡшы атай. Йорт- ихатаһын да иплә тота. Малын да ҡарай. Ҡортсолоҡ менән дә шөғөлләнә. Йөк машинаһы менән утын, бесән ташып, аҡса эшләй. Уны балта оҫтаһы, машина һәм тракторҙар ремонтлаусы тип тә беләләр. Шулай уҡ һүрәт төшөрөү менән дә мауыға. Булат йәмәғәт эштәренә лә өлгөрә. Ауылдың иң әүҙем кешеләренең береһе. Бар яҡшы башланғыстарҙы күтәреп алып, һәр кемгә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора.

Уның кеүек егеттәр етерлек ауылыбыҙҙа. Шуға ла инде, ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәк кеүек, яҙын-көҙөн ауылыбыҙҙа өр-яңы өйҙәр күтәрелеп кенә тора. Асы ауылы үҫә, төҙөкләнә. Яңы өйҙәргә ҡарап, сит яҡтан ял итергә килгән ҡунаҡтар һоҡлана. Кемдер алыш-биреш эше менән шөғөлләнә, икенселәре ял итергә килгән туристарға өйҙәрен ҡуртымға биреп аҡса эшләй. Ата-бабалар шөғөлөн - умартасылыҡты аяҡҡа баҫтырыу әүҙем аҡтарыла. Быға бигерәк тә йәш ғаиләләр ныҡлап тотона. Шуныһы ҡыуаныслы: айырылышыуҙар кәмей. Сөнки йәштәр ғаилә ҡороуға яуаплыраҡ ҡарай. "Бар яраштыра - юҡ ыҙғыштыра", тип, боронғолар бик дөрөҫ әйткән. Йәштәр үҙ көстәренә ышана, ата-әсәләре лә уларға ярҙам итә. Ләкин бер кем дә Хөкүмәттән ярҙам һорансылап йөрөмәй, күктән төшкәнде көтөп ятмай. Эсеп йөрөгән йәштәрҙе лә һирәгерәк осратырһың бөгөнгө көндә.

Аллаға шөкөр, тормошҡа зарланмай, тырышып-тырмашып йәшәргә ынтылыусылар һаны арта. Ауылдар бөтә, тигән ҡарашты инҡар итеп, беҙҙә йәштәр күпләп ауылда ҡала. Шуға ла тулы ышаныс менән, халыҡ үҙ асылына ҡайта, тормошҡа булған битарафлыҡ юғала, тип әйтергә була.

**Фәнүзә ҒАРИПОВА.**
**Белорет районы Асы ауылы.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# МОРАҘЫМДА БАР...

## Сынтимер самолеты



**Ауырғазы районының Мораҙым ауылында башҡорттар араһындағы беренсе осоусыһынаусы Ғәли Ишмырҙинға һәйкәл-стела ҡуйылған. Дүрт метр бейеклектә торбаға беркетелгән "Як-42" самолеты ел ыңғайына үҙ күсәре тирәләй әйләнә. Үҙенсәлекле һәйкәл ауыл оҫтаһы Сынтимер Сафиндың проекты.**

Сынтимер ағай менән һөйләшеү, әлбиттә, уның талантының тамырҙары - ата-бабалары тураһында хәтергә төшөрөүҙән башланды. Уның олатаһы Алламорат үткән быуаттың тәүге яртыһында йәшәгән, даны тирәяҡҡа таралған оҫталарҙың береһе булған. Мораҙым крәҫтиәне мал-тыуарын да аҫраған, йорт-ҡураһын да ипле тотҡан. Уның ауыл хужалығы "техникаһы", ҡоролмалары ла ауылдаштарыныҡынан ҡырҡа айырылған. Эштең һөҙөмтәлелеген арттырыу, кешегә һәм атҡа төшкән физик ауырлыҡты кәметеү өсөн үҙе тарафынан уйлап табып йәтешләнгән булған улар. Әлбиттә, Совет власы Алламоратты ла башҡалар менән "тигеҙләгән". Ләкин оҫта яңы замандa ла юғалып ҡалмаған, ҡулдары мөғжизә тыуҙырыуҙы дауам иткән.

Иң мөһиме, олаталарының оҫталығы ейәндәре ҡулына күскән. Бөгөн Мораҙым халҡы йорт төҙөү, машина-трактор ремонтлау, мәсеттәргә манаралар ҡуйыу кеүек етди эштәрҙе Алламораттың ейәне Сынтимер ағайға ышанып тапшыра. Бала сағында уҡ тартыла ул олатаһы шөғөләнә. Мәктәптәге хеҙмәт дәрестәрен көтөп ала. Ошонда ул тәүге тапҡыр ултырғыс, өҫтәл, башҡа йорт кәрәк-яраҡтары, ағастан башҡа әйберҙәр эшләүҙә оҫталығын камиллаштыра. Уҡытыусыһы һәр саҡ Сынтимерҙе тырышлығы, эште урынына еткереп, сифатлы башҡарғаны өсөн маҡтай. Әрменән һуң мәктәп директоры Сынтимергә физкультуранан уҡытырға тәҡдим итә. Дүрт йыл эшләй ул мәктәптә. Һәйбәт эшләй. Уны Өфөгә techинститутҡа ебәреп, юғары белем алырға ла өгөтләйҙәр. Тик Сынтимер техниканы яҡыныраҡ итә - ул колхозда механик булып эш башлай. Хаҡлы ялға сыҡҡансы, ремонлаусы-технолог, инженер, баш энергетик булып эшләй.

Мораҙымда Ғәли Ишмырҙин иҫтәлегенә һәйкәл ҡуйырға ҡарар итеlә. Ул - хәрби авиация кадрҙары әҙерләүгә баһалап бөткөһөҙ ҙур көс һалған, бик күп геройҙар, шул иҫәптән ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев кеүек кешеләрҙе тәрбиәләгән данлыҡлы осоусы. Ошондай данлыҡлы яҡташына һәйкәл-самолет ҡуйыуҙы Сынтимер Лотфрахман улы үҙ өҫтөнә ала. Стәрлетамаҡ ҡалаһынан металл һынығы итеп тапшырылырға әҙерләнгән самолетты барып алып ҡайтырға ярҙам итәләр уға. Оҫта уны йыя. Ваҡыт әҙ, ун көндә өлгөрөргә кәрәк. Ауылдаштары оҫтаға, тиҙерәк булыр тип, йыйылған самолетты бетон йә тимер терәккә беркетергә кәңәш бирә. Алламорат ейәне: "Самолет булғас, осҡан ҡошто хәтерләтергә тейеш ул", - тип, колхоз гаражынан, Талбазылағы МСУ-нан кәрәкле материалдар табып, өйөрәлә торған терәк эшләй. Самолет ел ыңғайына, үҙ күсәре тирәләй әйләнерлек итеп беркетеп ҡуйыла. Оҫта, самолеттың пропеллерҙарын да әйләнә торған итеп эшләргә ниәтләй. Ләкин һәйкәлдә тиҙерәк асырға кәрәк булғанға күрә, планының был өлөшөн тормошҡа ашырып өлгөрмәй.

"Бәләкәй сағымда конструктор булырға ла хыялланғайным, - тип хәтерләй Сынтимер ағай. - Техника ремонтлау, төҙөү, ҡутарыу, үҙемсә эшләү ҡанымда бит". Конструктор булып китмәһә лә, уға үҙ самолетын яһау бәхете тейә. Был тимер ҡош бөгөн Мораҙым ауылы янындағы тау битләүендә, күккә атылған ҡош шикелле, ауылға килеүселәрҙе ҡаршылай һәм оҙатып ҡала.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Тукланыу үҙенсәлектәре

Ун йыл элек, иртән, төшкөһөн һәм кисен нимә ашарға, тип үҙ-үҙем менән кәңәшләшә башланым. "Тултырма ашағым килә", тип үтенде тәнем. "Был мөмкин түгел, - тип яуапланы ихтыяр. - Икенсе нәмәне һайла". "Карабойҙай, картуф һәм борсаҡтан башҡа бер нәмә лә юҡ. Ә минең уларҙы күргем дә килмәй", - тип ҡарышты тәнем. "Ә мин һине ашыҡтырмайым, - тине ихтыяр. - Ашарға теләгең тыуғас, һуңыраҡ әйтерһең". Күп тапҡырҙар шулай тарҡҡылашҡандан һуң, ниһайәт, тән нимәләр булһа ашарға ризалашты. Бөгөн тәнем өйҙә булған азыҡ-түлек араһынан үҙенә нимә кәрәк, шуны һайлап ашай. Мин уның гәҙәттәрен белеп торам: ул бер төрлө ашамлыкты рәттән һайламай. Әгәр киске ашҡа ҡыҙҙырылған картуф икән, иртәнге ашҡа тәнем ҡарабойҙай йәки икенсе берәй ризыҡ һораны. Төшкө ашҡа щи йәки һөтлө, сырлы, борсаҡ ашы таптырҙы.

Өй шарттарында мин, ғәҙәттә, бер ашамлыҡ менән генә хушһынам. Һөтлө аш, өс киҫәк майлы икмәк, бер стакан йәшел сәй, бер балғалаҡ бал - төшкө аш шундай ризыҡтарҙан тороуы мөмкин. Иртәнге һәм киске ашҡа мин бутҡа йәки картуф иҙмәһе әҙерләйем. Компоттар һәм кеҫәл ғаиләбеҙҙә бик абруйлы түгел, шуға һәр саҡ сәйгә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Киске ашҡа мин ике киҫәк икмәктән артыҡ ашамаҫҡа тырышам, әммә гел шулай ғына барып сыҡмай. Көн дауамында эшләп, ихтыяр шул тиклем кәмей, көн һуңында инде тән хакимлыҡ итә башлай. Кискеһен, ҡайһы берҙә, башҡа ашамлыҡтарҙы иҫәпләмәйенсә, 5-6 ҡыҙҙырылған бөйөрәк ашап ҡуя торғайным. Бөгөн дә кискеһен туйғансы ашайым. Әммә һуңғы 18 йыл эсендә тәнем тулыһынса үҙгәрҙе. Ауыр аҡһым теләр-теләмәҫ кенә булһа ла тәнемдә ҡалдырып китергә мәжбүр булды. Тәнем еңеләйҙе, сөнки ауыр майҙарҙы еңел үҫемлек сығанаҡлы майҙар алмаштырҙы. Хәҙер мин үҙемдә йыш ҡына бер сәбәпһеҙгә эске ҡәнәғәтлек кисергән халәттә тоям. Ерҙәге ауырлыҡтар һәм көйөнөстәр миңә осраҡлы һәм әһәмиәтһеҙ булып күренә. Һәр саҡ тиерлек сәбәбен һүҙ менән әйтеп аңлатҡыһыҙ тыныс шатлыҡ кисерәм.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Мөғайын, гәзитебеҙҙе даими уҡып барған уҡыусыларҙа авторға һәм уның үҙ-үҙенде һауыҡтырыу, тукланыу ысулына, үҙенсәлегенә ҡарата төрлө һорауҙар тыуғандыр. Әгәр шулай икән, һорауҙарығыҙҙы беҙҙең адресҡа ебәрә йәки шылтыратып әйтә алаһығыҙ. Һорауҙар мотлаҡ авторға еткерелер һәм уларға яуаптар бирелер.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

89. Йоҡлар алдынан матур һәм ыяныу менән күнелде күтәрерлек, ыңғай тәьҫир итерлек китап уҡыуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ. Тиҙҙән бындай яңылыҡтың күҙгә күренеп торған ыңғай яҡтарын тойорһоғоҙ, сөнки алынған фекерҙәр көн дауамында ярҙам итер.

90. Тормош маҡсатығыҙҙың мөһим бер өлөшө итеп хәрәкәтсел, харизматик шәхес булыуҙы алығыҙ. Был - һәр кем үҙендә үҫтерә алған, әммә күптәр эшләмәгән сифаттарҙың береһе. Аҙҙан башлағыҙ. Дейл Карнегиҙың оратор оҫталығы буйынса курсын уҡығыҙ. Китапханаға барып, унда нисек һөйләшеү һәм үҙенде нисек тотоу буйынса китаптар алығыҙ. 3-4 яңы нескә шаяртыуҙы иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ һәм уларҙы аралашыу ваҡытында файҙаланығыҙ. Шул саҡта аралашыуҙан ҡәнәғәтлек алырһығыҙ һәм бик күп файҙалы яңы бәйләнештәр булдырырһығыҙ.

91. Ҡытай мәҡәле, аҡыллы кеше менән бер өҫтәл артында ултырып әңгәмә ҡороу бер ай китап уҡығанға тиң, ти. Аҡыллы кешеләрҙе эҙләгеҙ һәм уларҙан өйрәнегеҙ. Улар тап һеҙгә кәрәк мәғлүмәтте бирер өсөн һеҙҙең яҡтан саҡ ҡына булһа ла ҡыҙыҡһыныу осҡоно тоҡаныуын көтә.

92. Лао-Цзы бөйөк кешенең өс төп сифатын билдәләгән: беренсенән, йомшаҡлыҡ, наҙлылыҡ һәм нескәлек; икенсенән, һаҡсыллыҡ; өсөнсөнән, үҙенде кешеләргә ҡаршы ҡуйырға мөмкинлек бирмәгән баҫалҡылыҡ, тыйнаҡлыҡ. Наҙлы булығыҙ, һәм һеҙ ҡыйыу була алырһығыҙ; һаҡсыл булығыҙ, һәм һеҙ либераль була алырһығыҙ; барыһынан да алда барыуҙан ҡасығыҙ, һәм һеҙ ысын лидер булырһығыҙ.

93. "Бер төрлө күренгән ике юлды һайлау мөмкинлегегеҙ бар икән, хәүефлерәк тойолған юлды һайлағыҙ", - тигән У. Дж. Слим. Ҡыйыулыҡҡа алмаш юҡ. Атлап барғанда аяғығыҙҙы ҡаймыҡтырыу ихтималлығы булһа ла, был бер урында ғына тороп ҡайҙалыр барып етеү тураһында хыялланыуға ҡарағанда яҡшыраҡ. Үҙегеҙҙең мөмкинлектәрегеҙҙе файҙаланығыҙ, аҡыл менән тәүәккәллек итһәгеҙ, үҙегеҙ көткәндән дә юғарыраҡ уңышҡа өлгәшерһегеҙ.

94. Хәләлегеҙҙен, кем һәр саҡ эргәгеҙҙә һәм кемдең терәк булыуын көтәһегеҙ, төп бағыусыһы булығыҙ. Бөтөн ерҙә лә барлыҡ пландар өҫтөндә бергәләп эшләгеҙ һәм донъя буйлап ике кешенән торған армия кеүек ышаныслы атлағыҙ.

95. Һеҙҙе дәртләндереүсе, барлыҡ өмөттәрегеҙҙе тормошҡа ашырыуҙа һәм маҡсаттарығыҙға өлгәшеүҙә ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ өс кешене иҫләгеҙ. Алдағы бер нисә көндә уларҙың һәр ҡайһыһы менән осрашыу планлаштырығыҙ. Уларҙы тыңлағыҙ һәм йыйылған проблемаларығыҙҙы хәл итеү өсөн ҙур энтузиазм менән "мейе штурмын" башлағыҙ.

96. Тормошоғоҙҙоң һәр көнөнән шедевр яһағыҙ. "Һеҙҙе алға кем булыуығыҙ түгел, ә ҡыйыулығығыҙҙы туплап, кем булырға теләүегеҙ саҡырып торасаҡ", - тигән боронғо мәҡәлде онотмағыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 25 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.15 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Журов", 9-я и 10-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Хэнкок". Приключения (16+)
01.50, 03.05 "Портной из Панамы" (16+)
03.00 Новости
04.00 "Контролная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 " Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 50-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Остров ненужных людей". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Повороты судьбы", 1-я и 2-я серии (12+)
23.20 "Одна на миллион" (12+)
00.50 "Большие танцы. Крупным планом"
01.05 "Вести+"
01.25 Футбол. Товарищеский матч
03.30 "Большая любовь-5" (16+)
04.35 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.35 " Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Автограф". Илдар Сәйетов (6+)
10.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.35 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 40 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Рәмилә Сәлимгәрәева (6+)
14.15 Концерт. Сәғиҙулла Байегет (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Башҡорт йыры-2013" (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.30 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**12.00, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.15 "Весело живем"**
**12.30 "Дневники "Һылыуҡай-2013" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Чарующие звуки скрипки". И. Муслимов**
**14.45 "Волшебный курай"**
**15.15 "Царь горы" (6+)**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Бауырһаҡ"**
**16.00 "Шатлыҡ йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.40 Памяти народной артистки РСФСР Ф. Нафиковой(12+)**
**18.00 "Вопрос+Ответ=Портрет"**
**18.45 Первенство России по футболу среди команд ФНЛ. "Уфа" (Уфа) - "Балтика" (Калининград)**
**21.00 XII Международный турнир по каратэ "Полосатый тигр" (12+)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**22.30 Художественный фильм (16+)**

## 26 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.16 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Журов", 11-я и 12-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Лиллехаммер", 4-я серия (18+)
01.20, 03.05 "Любовь и прочие обстоятельства". Драма (16+)
03.00 Новости
03.25 "Игорь Тальков. Поверженный в бою" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 51-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Остров ненужных людей". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Повороты судьбы", 3-я и 4-я серии (12+)
23.20 "Специальный корреспондент" (16+)
00.25 "Рулетка большого террора. Красные-белые" (16+)
01.25 "Большие танцы. Крупным планом"
01.40 "Вести+"
02.05 "Честный детектив" (12+)
02.35 "Большая игра"
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.35 "Йәштәр тауышы" (6+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
09.55 "Ҡош юлы" . Фәриҙә Ҡудашева (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Юлай Үҙәнбаев ижад иткән йырҙар (0+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Һәнүәт Сәлмәнова (6+)
14.15 " Алҡыштар". Әхәт Хөсәйенов (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Бүрелар" төркөмө концерты (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30 "Итоги спорта" (16+)**
**12.00, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.30 "Дневники "Һылыуҡай-2013" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии Уральских гор". Р. Юлдашев"**
**14.45 "Тәмле" (на башк. яз.)**
**15.15 "Книга сказок" (6+)**
**15.45 "Борсаҡ"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Үткән ғүмер. 1960-е годы"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**18.30, 20.30 "Телецентр"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Полезные новости"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30 Художественный фильм (16+)**

## 27 МАРТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.15 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Журов", 13-я и 14-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Форс-мажоры" (16+)
01.15, 03.05 "Шаолинь". Боевик (16+)
03.00 Новости
03.50 "О Москве, слезах и Вере Алентовой" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 52-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Остров ненужных людей". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Повороты судьбы", 5-я и 6-я серии (12+)
23.20 "Свидетели"
01.15 "Большие танцы. Крупным планом"
01.30 "Вести+"
01.55 "Большая игра"
03.15 "Большая любовь-5" (16+)
04.35 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.35 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.30 "Замандаштар". Әнүәр Сөләймәнов (0+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Фирзинә Абдуллина йырлай (6+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Фәниә Чанышева (0+)
21.00 "Кис ултырып" Миңзифа Исҡужина (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00 "Документальный фильм" (16+)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 17.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30 "Отдел культуры" (12+)**
**12.00, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.15 "Весело живем"**
**12.30 "Дневники "Һылыуҡай-2013" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Напевы родной земли". Концерт**
**14.45 "Көндәлек" (6+)**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.45 "Семәр"**
**16.00 "Городок АЮЯ"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**17.45 "Алтын тирмә"**
**18.55 Волейбол. Чемпионат России**
**21.00 "Служители. Мельпомены. К Международному дню театра"**
**22.00 "Историческая среда"**
**22.30 Художественный фильм (16+)**

## 28 МАРТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Торговый центр". Сериал (16+)
16.15 "Пока еще не поздно" (16+)
17.00 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Журов", 15-я и 16-я, закл. серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя" (12+)
01.15, 03.05 "Американец". Криминальная драма (16+)
03.00 Новости
03.15 "Царь скорпионов" (12+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 53-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Остров ненужных людей". Сериал (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Повороты судьбы", 7-я и 8-я серии (12+)
23.20 "Поединок" (12+)
01.00 "Большие танцы. Крупным планом"
01.10 "Вести+"
01.35 "Большая игра" (16+)
02.55 "Большая любовь-5" (16+)
04.05 "Комната смеха"
04.35 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 " Ҡәмит". Юмор (6+)
08.35 "Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
